ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

3-9 июль (майай) 2021

№27 (965)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуға хаҡы ирекле

БЫЛ҃ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Битлек кейеп йоҡларғамы?**



2

**Рәсәй халҡы...**

тарихи-мәҙәни тамырҙары менән бөйөк



4

**Милли кейем кейеү -**

ул асылыңды таныу, үҙаңдың үҫеше билдәһе



8-9

**Йөрәктәрендә...**

Бәндәбикәләребеҙ тоҡандырған ҡуҙ баҙлай



12-13

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 2021 йылдың икенсе яртыһында ла "Киске Өфө" менән дуҫлыҡҡа тоғро ҡалғанығыҙ өсөн оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Ә хәҙер 2022 йылдың беренсе яртыһы тураһында ваҡытынан алда хәстәрлек күреп, июль-август айҙарында "Киске Өфө"гә 6 айға - 692 һум 94 тингә, 3 айға - 346 һум 47 тингә яҙыла башлай алаһығыҙ. Бергә булайыҡ!***

ФОЛЬКЛОРИАДА - 2021

# ҠУНАҠТАРҒА БҮЛӘККӘ...

## башҡорт матрешкалары

**VI Бөтә донъя фольклориадаһының символы булған башҡорт матрешкаларын "Ағиҙел" Башҡорт художество кәсептәре предприятиеһы етештерә. Ошо көндәрҙә унда ике меңдән ашыу ҡурсаҡтар ҡулдан биҙәлеп бөттө. Рәсәйҙең был күптән таныш символын "башҡортлаштырыу"ҙы кемдәр уйлап тапҡанын һәм кемдәр биҙәгәнен белешеү өсөн "Ағиҙел"дең хеҙмәткәрҙәре менән осрашып һөйләштек. Предприятиеның баш рәссамы Арыҫлан БИКБАЙ һәм дизайнер Эльмира ДӘҮЛӘТОВА бына нимәләр һөйләне.**

**Эльмира Әүхәт ҡыҙы:** Ни өсөн был бөтөн донъя кимәлендәге сараның символы итеп тап матрешка һайланды? Берҙән, символ ситтән килгән ҡунаҡтар өсөн таныш булһын, тип уйланыҡ. Сөнки улар Рәсәйҙе тап ошо матрешка, айыу, балалайка кеүек ҡалыплашҡан символдар аша белә бит. Икенсенән, Фольклориада Башҡортостанда, башҡорт ерендә үткәс, беҙ был символды үҙебеҙҙең форматта күрһәтергә теләнек һәм уға башҡорт ҡатын-ҡыҙы кейемен кейҙерҙек. Ә инде "урыҫ символы" тигәнгә һағайып ҡарағандарға аңлатма бирәбеҙ: матрешка, асылда, урыҫтыҡы ғына түгел, уның төрҙәрен будда храмдарында ла, Япония, Ҡытай һарайҙарында ла, Һиндостан изгеләре сүрәтендә лә тапҡандар. Тимәк, был бүленеп асыла һәм эсенә "балалары" тейәлә торған ҡурсаҡтар күп урындарҙа булған. Рәсәйгә килеп эләккәс, ул "урыҫлаштырылған". Шулай булғас, бөгөн уны "башҡортлаштырыу"ҙың да бер хилафы ла юҡ.

**Арыҫлан Руслан улы:** Фольклориада матрешкаһына Дим башҡорттары кейемен кейҙерҙек. Был кейемде барыһы ла таный: уның еләне, ҡашмауы, селтәре беҙҙең милли кейемдең иң сағыу варианты булып тора. Ә инде ҡатлансыҡтағы ете ҡурсаҡта ете милли кейем төрө лә сағылыш таба. Былар: көньяҡ-көнсығыш (Дим), Һамар-Ырғыҙ, үҙәк (Инйәр), төньяҡ-көнсығыш һәм көнсығыш (Урал арьяғы) башҡорттарының стандарт милли кейем төрҙәре. Һәм был кейемдәр дизайнерҙың, рәссамдарҙың фантазияһы ғына түгел, ә уларҙың этнографтар, музейҙар, фольклор белгестәре, тарихсылар, райондарҙағы ерле халыҡ менән кәңәшләшеүенән, мәғлүмәттәр йыйыуынан төҙөлгән эскиздар.

**Эльмира Әүхәт ҡыҙы:** Эскиздар ваҡ деталдәрһеҙ, үҙенсәлекле элементтарға ныҡлы иғтибар менән эшләнде. Мәҫәлән, Ҡурған башҡорттарында күлдәктәр һәм яулыҡтар сигеүҙәргә бай. Шулай уҡ һәр яҡтың үҙ биҙәүесе: һаҡалдар, яғалар, селтәрҙәр, муйынсалар, хәситәләр. Бына, төньяҡ-көнбайыш башҡорттары кейемендәге матрешкала түш һәм яурын аша кейелгән хәситә менән уҡа иҙеү. Был уларҙың айырым бер таныта торған, үҙҙәренә генә хас булған төрлөлөктәре.

Матрешкаларҙың йөҙ-төҫ һыҙаттарына килгәндә лә, улар бер иштән генә түгел. Беҙҙә барыһы ла ҡулдан эшләнә, матрешкаларҙың биҙәлеше лә һәр рәссамдың ҡулында авторҙың эске донъяһын сағылдыра. Күрәһегеҙ, бер ҡурсаҡтың күҙҙәре ҡыҫығыраҡ, тимәк, яһаусы уны шулай күрә, икенсеһененең күҙҙәре көнсығышса ҡыяраҡ, өсөнсөһөнөң күҙҙәре түңәрәк һәм башҡалар. Кешеләрҙә була торған бөтөн йөҙ һыҙаттары ла һалынған ҡурсаҡтарға.

**Арыҫлан Руслан улы:** Башҡорт матрешкаларының әлегә атап ҡына әйтә торған исеме юҡ. Матрешка ул Матрена исеменән, матрона, йәғни, дама - ҡатын, ханым һүҙенән яһалған икәнен беләбеҙ. Ә башҡортса нисек атарға икәне уйланылмаған. Халыҡ араһында, бәлки, уның атамаһы ла табылып ҡуйыр әле? Шулай уҡ матрешкаларға ҡушып, бәләкәй генә брошюра ла сығарабыҙ. Был китапсыҡта ҡурсаҡтарҙың ырыу бүленеше, кейем, биҙәүес атамалары хаҡында ҡыҫҡа ғына мәғлүмәт буласаҡ.

Башҡорт матрешкаһы беҙҙең предприятиела быға тиклем дә эшләнде, ул һатыуҙа булды һәм әле лә бар. Ә инде уның Фольклориада символы булыуы үтә лә мәртәбә. Был сувенир килгән ҡунаҡтарға Башҡортостандың матур иҫтәлеге, ә үҙебеҙҙекеләргә башҡорт милли кейемдәрен пропагандалаусы, аңлатыусы, өйрәтеүсе бер күргәҙмә дәреслек булырына ышанабыҙ.

**Әлиә СӘЙҒӘФӘРОВА яҙып алды.**

**(Теманың дауамы 6-сы биттә).**



12+

БЫНАҒАЙЫШ!

**Май, июнь айҙарында һауа торошо беҙҙе былай ҙа ҡыуандырманы, өҫтәүенә, Өфө халҡы тап ошо мәлдәрҙә һулар һауаға интегеп, зар-интизар булды. Һауа инһен өсөн тәҙрәләрҙе асыр хәл дә юҡ: өйгә һаҫыҡ, зәһәр еҫ тула, химияны был, канализация "хушбуйымы" - эт белә. Рәсми органдарҙан был хаҡта бер ниндәй белдереү-фәлән дә булманы тәү осор. Яман еҫ айырыуса Өфөнөң төньяҡ биҫтәһе Черниковкала, унан ҡала бөтөн райондарҙан да түбәнерәк уйһыулыҡта ятҡан Сипайловола нык беленде: көкөрт ҡатышмаһына тартым, шул уҡ ваҡытта әсе төтөн һөрөмөн хәтерләткән һауанан ҡасыр урын юҡ, тәҙрәләрҙе шыплап ябып ҡуйырға тура килә.**

# БИТЛЕК КЕЙЕП ЙӨҠЛАРҒАМЫ?

Ярай, был бер йә ни бары икеөс көн генә барһа, ә бит хәҙер быны хәл ике ай буйына дауам итә. Һауаның бысраныуына тәүҙә Яңы Черкассы сүп-сар полигонындағы янғын сәбәпсе тип аңлатылһа, Өфөнөң ҡайһы бер сәнәғәт предприятиелары ла ошо янғын төтөнөнә "ышыҡланып", үҙ эштәрен башҡара башланы, буғай, сөнки ябай сүп-сар, пластмасса, башҡа төрлө ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары янған еҫте заводтарҙан сығарып ташланған химик берләшмәләр еҫенән айырырға була. Быны өсөн "спец" булыу ҙа кәрәкмәй - Өфөлә былай шарттарҙа тәүге көн йәшәмәйбеҙ һәм ҡаланың эре сәнәғәт предприятиелары, нефть заводтары, йылылыҡ-энергетика компаниялары бүлеп сығарған еҫтәрҙе һуларға ла, танырға ла өйрәнеп бөткәнбеҙ инде күптән. Был тағы шунан да күренә: сүп-сар янғыны көнө буйы быҫҡып ятһа ла, ул әллә ни артыҡ һиҙелмәй, ә әлеге заводтар еҫе айырыуса кис һәм төн ялға ҡаршы - шәмбе-йәкшәмбе көндәре көсәйә. Был ваҡыттарҙа көндөҙ һауала "эленеп торған" томан һәм һөрөм болотон (смог) күрмәү мөмкин түгел.

Ҡайһы бер әсе теллеләр, химик еҫтәрҙең кис, төн һәм ял көндәренә тап килеүен ҙур чиновниктарҙың Өфөнән ситтә, тәбиғәт ҡосағында урынлашҡан коттедждарына ялға ҡайтып китеүҙәрен файҙаланып эшләнә, тип тә төрттөрөп алғыланы. Шулаймы-түгелме, ләкин саф һауаға интегеүсе әлеге райондар халҡы май айынан бирле ялыу артынан ялыу яуҙырһа ла, байтаҡ ваҡыт был мәсьәләгә иғтибар бирелеп еткерелмәне. Ниһайәт, икенсе ай буйы дауам иткән был хәл буйынса БР Экология һәм тәбиғәттән файҙаланыу министрлығы әйләнә-тирә мөхитте бысратыусы сәбәптәрҙе атаны: Өфө нефть эшкәртеү заводтары, йылылыҡ-энергетика компаниялары бүлеп сығарған зарарлы химик ҡалдыҡтар, канализация таҙартыу ҡоролмалары һәм әлеге Черкассы сүп-сар полигонындағы янғын эҙемтәләре. Әйләнә-тирә мөхиттәге еҫ һәм зарарлы матдәләрҙең таралып, осоп китә алмауына елһеҙ (штиль) һәм эҫе һауа торошо ла булышлыҡ итә, әлбиттә.



Баш ҡалала май баштарынан күҙәтелгән һәм халыҡтан туктауһыҙ яуып торған ялыуҙарға яуап бирел, Роспотребнадзор республика идаралығы 27 майҙан алып һауаның бысраныу кимәле көн һайын тикшерелеп барыуы хаҡында хәбәр итте һәм дәғүәләрҙең нигеҙле булыуын раҫланы. Мәҫәлән, "Тирә-яҡ мөхиттең гидрометеорология һәм мониторингы буйынса Башҡортостан идаралығы" отчетында 18 һәм 23 июнда һауала көкөрт водородлыны 1,2-2,4 тапҡырға, изопропилбензолдың 1,2 тапҡырға норманан артыҡ булыуы теркәлгән, ә инде көкөрт водороды 18,25, 27 майҙа уҡ 1,4-2,9 ПДК-ға юғары булыуы күҙәтелгән. Май һәм июнь айҙарының төрлө көндәрендә атмосферала шулай уҡ фенол, водород хлориды, этилбензол һәм башҡа матдәләрҙең норманан артыҡ булыуы асыҡланған.

Ниһайәт, ике ай тигәндә, баш ҡалалағы экологик хәл менән республика властары ла ныҡлап шөғөлләнергә булды. 25 июнь Башҡортостан Хөкүмәте йортонда Республика менән идара итеү үҙәге һәм "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы Өфө халҡы мөрәжәғәттәре буйынса онлайн-брифинг үткәрҙе. Өфө ҡала хакимиәте башлығы Сергей Греков Яңы Черкассылағы полигонда сыҡҡан янғын эҙемтәһе менән бер рәттән, һауаны бысратыусы зарарлы ҡалдыҡтар сығанағы тип ҡаланың төньяҡ районындағы сәнәғәт предприятиеларын атаны. Башҡортостан буйынса РФ Гәҙәттән тыш хәлдәр идаралығы начальнигы урынбаҫары Эдуард Иҙрисов, сүп-сар полигонындағы янғын һүндерелде, уның сәбәптәре асыҡлана, тине. БР экология һәм тәбиғәттән файҙаланыу министры Урал Искәндәров, үткән айҙа министрлыҡҡа Өфөләге экологик хәл буйынса 200-ҙән ашыу дәғүә килде, тине. Әйләнә-тирә мөхиттең бысраныу факттары буйынса Росприроднадзорға 18 хат әҙерләп ебәрелеүе тураһында әйтте, сөнки сәнәғәт предприятиеларында тикшереүҙәр алып барыуға ошо ведомствоның ғына хоҡуғы бар.

"Өфө халҡы ай ярым элек уҡ власть органдарына мөрәжәғәт итә башлай, ләкин ни өсөн тикшереү эштәре һуңлап башҡарыла?" - тигән һорауға Росприроднадзорҙың Көньяҡ Урал төбәкара идаралығының начальник урынбаҫары Светлана Хәлимова аңлатмаһы аптыратып ҡуйҙы: "Ялыу, сигнал алыу менән предприятиеға килеп тикшереү үткәрә башларға ярамай, бындай саларға әҙерләнеү өсөн беҙгә 20 көн бирелә", - тине ул. Егерме көн! Икенсе төрлө әйткәндә, был чиновниктар бюрократияһы, ҡағыҙ ыҕы-зыҕыны, прокуратура менән килешеү, өҫтәүенә, тикшереләсәк предприятиены бер тәүлек алдан иҫкәртеү эштәрен үҙ эсенә ала икән... Ә был ваҡыт экологияны бысратыусы сығанаҡтар файҙаһына эшләмәй тип кем әйтер? Айға яҡын был ваҡыт эсендә гәйепле предприятиелар иркенләп "эҙ яҙҙыра", яуаплылыҡтан ҡотолоу саралары күрә ала. Республика Роспотребнадзор идаралығы етәксеһе Анна Казак әйтмешләй, һауа - ул тиҙ осоусан мөхит, шуның өсөн 10 минут эсендә лә норманан артыҡ бысраныуҙарҙы теркәп өлгөрөү ҡыйын. Ҡыҫҡаһы, брифинг барышында ҡатнашҡан Светлана Хәлимованың сығышы былай тип тамамлана: "Беҙ, әлбиттә, билдәләнгән тәртиптә һәр материал буйынса административ яуаплылыҡ саралары күрҙек". Был дөйөм йомлә артында гәйепле кемдәр һәм ниндәй предприятиелар "йәшеренгән" - улар хаҡында ләм-мим. Күрәһең, һауаға сығарып ташланған зыяндың норманан 2,5 тапҡырға артыҡ булыуы кемдәр өсөндөр гәҙәти хәл тип ҡабул ителәләр. Етмәһә, БР һаулыҡ һаҡлау министрының ышаныслы итеп: "Хәүеф юҡ. 25 июнгә Өфө халҡы был мәсьәлә буйынса һаулыҡ һаҡлау учреждениеларына мөрәжәғәт итмәгән, "ашығыс ярҙам" саҡыртмаған, бер кем дә дауаханаға һалынмаған",- тип белдереүе лә, йомшаҡ итеп әйткәндә, күңелдә ризаһыҙлыҡ юшҡыны ҡалдырҙы...

Экология һаҡсылары ике ай буйына гәйепле предприятиеларҙы асыҡлай алмай яфалана икән, тимәк, бынауындай эҫе көн һәм тынсыу төндәрҙә ярға ташланған балыҡ ише һауаға мохтаж булып, йөҡлай алмай интеккән халыҡҡа, йөрәк-ҡан тамырҙары, тын юлдары сирлеләргә ни эшләргә ҡала? Башҡа сара юҡ икән, һаулыҡ һаҡлау министры халыҡҡа үҙ өйөндә төнөн битлек кейеп йоҡларға кәңәш бирер ине, исмаһам...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

КӨНАУАЗ

# АЙЫРМАБЫҘ БАРМЫ?



**Билдәле булыуынса, теге йәки был халыҡтың мәҙәниәтендә, телендә, әхлаҡи-этик нормаларында, йәшәү тәртибендә, ышаныуҙарында тик уға ғына хас үҙенсәлекле билдәләр бар. Оҡшашлыҡтың сәбәптәре иһә бер осраҡта - халыҡтар араһындағы тарихи-генетик, икенсе осраҡта ижтимағи үҫештәге оҡшаш шарттар нигеҙендә яралған тарихи-типологик уртаҡлыҡ менән аңлатыла.**

Шул уҡ ваҡытта кешеләрҙең поэтик, логик фекерләүендәге дөйөм кешелек донъяһына хас яҙылмаған ҡанундарҙың булыуын да иҫтән сығарырға ярамай. Поэтик ижадтағы оҡшашлыҡтың йәнә бер сәбәбе - алынмасылыҡ. Был күренеште фольклорҙың төрлө жанрҙары миҫалында күрһәтергә була. Мәҡәлән, мәҡәл, әйтемдәрҙең бер халыҡтан икенсеһенә күсеү осраҡтары. Башҡорт мәҡәлдәре һәм әйтемдәре араһында ла башҡа телдәрҙән ингән берәмектәр осрай, ләкин улар һан яғынан күп түгел. Бәгзеләре, нигеҙҙә, матбуғат биттәрендә осрағандары, урыҫ теленән тәржемә булараҡ ҡабул ителә. Башҡорт һәм инглиз телдәрендәге һүҙмә-һүҙ тура килгән мәҡәлдәрҙең ҡайһылары башҡорт теленә инглизсәнән урыҫ теле аша килеп ингән булыуы ихтимал. Тик шуныһы, теге йәки был мәҡәлде фәҡәт инглизсәнән тип ҡәтғи рәүештә раҫлау ҙа ауыр. Ни өсөн тигәндә, инглизсәгә грек, латин, француз, немец телдәренән алынған мәҡәл-әйтем, фразеологизмдар байтаҡ. Донъя халыҡтарының фольклорында, дөйөм алғанда, бер үк жанрҙар. Ни өсөн тигәндә, халыҡ ижады жанрҙарының һәр береһе кеше тормошо менән бәйле, үҙенең тәғәйенләнеше һәм функцияһы бар. Бына ошо дөйөмлөк, оҡшашлыҡ эсендә беҙ башҡорт фольклорын үҙ асылы, үҙенсәлеге, беҙгә генә хас һыҙаттары менән тулы ғына килеш һаҡлап ҡалырға, үҫтерергә һәм күрһәтә белергә тейеш.

**Фәнүзә НӘҘЕРШИНА, филология фәндәре докторы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓2 июлгә Башҡортостанда 155 кешелә яңы коронавирус инфекцияһына тест ыңғай һөҙөмтә күрһәткән. Шулай итеп, пандемия башланғандан алып республикала 41 665 кешелә ошо диагноз раҫланған. 2 июлгә республикала 2037 кеше коронавирусты әүҙем йөрөтөүсе тип иҫәпләнә. Һуңғы тәүлектә тағы биш сирле хәүефле инфекциянан донъя ҡуйған. Мәкерле ауырыу ҡорбандарының дөйөм һаны - 604. Дауахананан тыш пневмония менән ауырыусыларға тағы 119 өҫтәлгән.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика Хөкүмәтендә уҙған оператив кәңәшмәлә Фольклориада уҙғарыу тураһында һөйләне. "Ошо Фольклориаданы ике йыл көттөк. Ул Бөтә донъя ойошмаһы, илебеҙ Президенты бойороғо менән үткәрелә. Беҙ был баҡиғаға ентекле әҙерләндек, 22 муниципалитет, артистар ныҡлап әҙерләнде. Фольклориада буласаҡ! Асылда, коронавирус инфекцияһын индереү хәүефе юҡ - был мөмкин түгел. Кешеләрҙең күпләп йыйылыуы ҙур хәүеф тыуҙыра, әлбиттә, был хаҡта уйларға, саралар ҡабул итергә кәрәк", - тине Радий Хәбиров.

✓Уҙған аҙнала Башҡортостанда коронавирус инфекцияһынан вакцинация темпы 10 тапҡырға артҡан, тип белдерҙе республика вице-премьеры - һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә. "Әлеге көндә 180 пунктта (шул иҫәптән күсмә) халыҡҡа прививка яһау ойошторолған, - тине ул. - Рәсәйҙә вакцинация темпы буйынса алдынғы урындарҙың береһен - алтынсы урынды биләйбеҙ. Ил субъекттарына килтерелгән вакцинаны файҙаланыу темпы буйынса - икенсе урын".

✓Баш ҡалала Башҡортостандың тыуған яҡты өйрәнеүселәре форумы үтте. Форумға республиканан тыш, Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән ғалимдар, тарихсылар, башҡорт ҡоролтайҙары вәкилдәре, музей һәм китапхана хеҙмәткәрҙәре, журналистар йыйылды. Башҡортостан ауылдарының тарихын өйрәнеү мәсьәләләре, генеалогик тикшеренеүҙәр һәм тыуған яҡты өйрәнеүҙә яңы формат буларaҡ башҡорт ырыуҙары хәрәкәте, республикала археология ҡомартҡыларын өйрәнеү һәм популярлаштырыу проблемалары, тыуған яҡты өйрәнеү эшен популярлаштырыуҙа музейҙарҙың һәм китапханаларҙың роле ҡаралды *(гәзитебеҙҙең киләһе һанында уҡырһығыҙ).*

*БЫЛ АЙҘА...*

# КӨН ФАРАЗЫН КЕМ БУТАЙ?



**Быйылғы йәй әҙәм балаларын "ҡыҙған табала" бейетеп алырға уйлай, күрәһең: синоптиктар кемуҙҙарҙан йәйҙең икенсе айы июлдә көндәрҙең гәҙәттән тыш эҫе торасағын күҙаллай һәм бының август аҙаҡтарына тиклем һуҙыласағын тоҫмаллай.**

Мәҫәлән, Фобос һауа торошо үҙәге фаразлауынса, июлдә Волга буйы, шул иҫәптән Башҡортостан, Сыуаш республикалары эҫелектең иң ҡыҙыу үҙәгенә әйләнәсәк, ә Татарстанда "Африка селләһе" - һауа температураһының 35-40 градусҡаса етеүе көтөлә, тип хәбәр ителә. Дөрөҫ, һауа торошондағы көтөлмәгән үҙгәрештәр һуңғы ваҡыт йыш ҡына синоптиктарҙы уңайһыҙ хәлдә ҡалдыра башланы. Эстән генә был юлы ла шулай булыуын теләргә ҡала, сөнки ике айға һуҙыласаҡ аномаль эҫелек хәүефле һөҙөмтәләргә килтереүе бар: йорәк-ҡан тамырҙары сирлеләр быңдай һынауҙарҙы күтәрә алмауҙары ихтимал. Ә шулай ҙа кемгә ышанырға?

Бәлки, етдиерәк ойошма - Рус географияһы йәмғиәтенең метеорология хеҙмәте Фобос мәғлүмәте буйынса берәй асыҡлыҡ индерер? Ләкин синоптик, география фәндәре кандидаты Екатерина Пестрякова ла күңелдә тыуып өлгөргән хәүефте баҫа алманы: "Ике йыл буйына Себер киңлектәрендә хакимлыҡ ҡылған антициклон хәҙер Уралға күсте, - ти ул. - Ҡыш антициклон һалҡын ел, йәй, киреһенсә, эҫе һәм ҡоро һауа килтерә. Уралда быйыл июль айының тап шундай булыуы көтөлә лә..." Прогнозлауҙа ҙур тәжрибә туплаған Рәсәй Гидрометүҙәк белгестәре ни әйтер? Уларҙың фараздары ла йыуаныс бирмәй: тотош ил буйынса һауа температураһы нормаға яҡын, ләкин төньяҡ төбәктәрҙә июль һалҡынса, ә бына Волга буйы һәм Көньяҡ Уралда уртаса һауа температураһы 26-28 градус эҫелек тәшкил итәсәк, ти улар.

Һуңғы йылдарҙа һауа торошоноң тамам боҙолоп, сығырынан сығыуы, тотороҡһоҙ һәм киҫкен үҙгәрештәргә дусар булып тороуы; ҡайҙалыр - һыу баҫыу, ҡойма ямғырҙар, икенсе ерҙә - ҡоролоҡ, шуның менән бәйле һәр төрлө ҡоротҡос бөжәктәр "армадаһы"ның урман һәм баҫыуҙарҙы баҫып алыуы, бал ҡорттарының күпләп ҡырылыуы билдәле сәбәптәр - глобаль йылыныу, парник эффекты, антициклон хәрәкәте,Ҡояш әүҙемлеге кеүек атмосфера күренештәренә бәйләп аңлатыла килә, ләкин кеше фантазияһы аномаль күренештәрҙең башҡа сәбәптәрен эҙләй, уйҙырмалар килтереп сығарырға ярата. Һуңғы ваҡыт ошо юҫыҡта сит илдәрҙән, атап әйткәндә, Американың климат ҡоралы менән "шаярыуы", бының иңә һауа торошонда катаклизмдарға сәбәп булыуы хаҡында бәхәстәр булып алды. Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Алексей Журавлев бынан ике йыл элек 2019 йылдың һалҡын йәйе менән бәйле быны Вашингтондың эше тип белдергәйне. "MilitaryArms.ru" хәрби күҙәтеүҙәр сайтында кешелектең, ысынлап та, климатты үҙгәртеү буйынса тәжрибәләр үткәрергә, яуым-төшөм һәм боҙ ямғыры менән сәсеүлектәрҙе юҡҡа сығарырға өйрәнеүе хаҡында яҙып сыҡҡайны. Ошо материалда Аляскалағы 13 га майҙанда төҙөлгән юғары йышлыҡтағы гигант антенналар ҡоролмаһы - HAARP америка комплексы менән Рәсәйҙең Түбәнге Новгород ҡалаһы янындағы "Сура" объекты телгә алына. HAARP программаһының ни менән шөғөлләнеүе әйтеп еткерелмәһә лә, "Сура"ның фәҡәт тыныс ғилми эшмәкәрлеге, юғары атмосфера ҡатламдарында электр магниты күренештәрен өйрәнеүе хаҡында телгә алып кителә. Дөрөҫөн әйткәндә, заманында Америка Вьетнамға ҡаршы һуғышта уҡ климат ҡоралын ҡулланған һәм самолеттарҙан джунгли өҫтөнә ҡоро боҙ менән иодлы көмөш химикаты һиптереп, ҡойма яуындар булдырған һәм Вьетнам партизандарының стратегик һуҡмаҡтарын йыуҙырып, юлдарын япҡан.

Климат ҡоралы тигәндән, белгестәр шулай уҡ космос спутниктары ярҙамында ла һауа торошо менән идара итеү, тәбиғәт катаклизмдары, ер тетрәүҙәр булдырыу ихтималлығын инҡар итмәй. Юҡҡа ғынамы ни Берләшкән Милләттәр ойошмаһы донъя илдәре менән климат хәүефһеҙлеге буйынса килешеүҙәр һәм конвенциялар төҙөүгә ныҡлы иғтибар бирә, ләкин, үкенескә, был документтарҙы һаңға һуҡмаған илдәр ҙә бар. Кемдер әйтмешләй, донъя илдәренән климат хәүефһеҙлеге буйынса закон һәм килешеүҙәрҙең үтәлеүен талап итеп, проблемаларҙы ыңғайға көйләп булмай икән, стихиялы шарттарға күнергә, аномаль тәбиғәт күренештәре менән килешеп йәшәргә тура киләсәк. Ҡабаттан баш күтәргән янынан-яңы штамлы корона зәхмәтенә яйланырға мәжбүр булған кеүек үк. Ошо нигеҙҙә киләһе көндәребеҙ, айҙарыбыҙ, йылдарыбыҙ ниндәй генә булмаһын, сабырлыҡ менән Аллаһ ҡөҙрәтенә һыйынырға, Уның ярлыҡауына, мәрхәмәтенә өмөт итергә ҡала. Бының өсөн йыйын да бирепт тора Хоҙайыбыҙ. Был айҙа иң мөбәрәк көн - Ислам донъяһындағы ике олуғ байрамдың береһе - Ҡорбан ғәйете **(20)** билдәләнә.

Майайҙа иҫтәлекле көндәр һәм һөнәри байрамдар байтаҡ: Хәрби хәрәкәт ветерандары **(1)**, Халыҡ-ара спорт журналистары **(2)**, ЮХХДИ **(3)** көндәре, Диңгеҙ һәм йылға флоты **(4)**, Бөтөн Рәсәй ғаилә, мөхәббәт һәм тоғролоҡ **(8)**, Рәсәй почтаһы, Балыҡсы, Бөтөн донъя халыҡтары **(11)**, Рәсәй Диңгеҙ авиацияһы **(17)**, Металлург **(18)**, Халыҡ-ара шахмат **(20)**, Сауҙа хеҙмәткәрҙәре **(24)**, Хәрби-Диңгеҙ флоты **(25)**, РФ Тәфтиш хеҙмәткәрҙәре **(26)**, Гепатитҡа ҡаршы көрәш **(28)**, Халыҡ-ара юлбарыҫ **(29)**, Халыҡ-ара дуҫлыҡ **(30)** көндәре билдәләнә.

**Майайҙа тыуғандар:**

**7 -** башҡорт сәсәне, ҡурайсы һәм йырауҫы **Ишмөхәмәт сәсәндең** (Ишмөхәмәт Мырҙаҡаев) **тыуыуына - 240 йыл** (1781-1878).

**11 -** филолог, педагог-методист, педагогика фәндәре кандидаты, РФ юғары һөнәри белем биреү буйынса почетлы хеҙмәткәр, Башҡортостандың атҡаҙанған халыҡ мәғарифы хеҙмәткәре **Вәкил Хажинға - 75 йәш** (1946).

**15 -** йырсы, 1967-1991 йылдарҙа Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры артисы, Рәсәйҙең - атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы **Нажиә Аллаяроваға - 85 йәш** (1936).

**-** умартасы, ауыл хужалығы фәндәре кандидаты, ҡортсолоҡ буйынса китаптар авторы **Ивний Шафиҡовҡа - 85 йәш** (1936).

**17 -** прозаик, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге республика премияһы лауреаты, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Ноғман Мусинға - 90 йәш** (1931).

**31 -** бейеүсе, балетмейстер, Башҡортостандың халыҡ артисы **Филүс Ҡаҙаҡбаевҡа - 50 йәш** (1971).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!*

# ШЫТЫМ ҺАТАМ...



**"Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға килемле генә шөғөл хаҡында яҙып үткем килә. Үҙем ошо өлкәне ныҡлап өйрәнеп, эш башлағаныма бер йыл.**

Мин өйҙә микройәшеллектәр (микрозелень) үҫтереп һатам. Микройәшеллек - үҫемлектәрҙең шытымы. Улар беҙ түтәлдәрҙә күреп өйрәнгән үҫемлектәрҙең бәләкәй версияһы, тип әйткәндә лә була. Ләкин түтәлдәге үҫемлектән айырмалы рәүештә, шытымдарҙы оҙаҡ үҫтерергә, тәрбиәләргә кәрәкмәй - олонола 1-2 япраҡ барлыҡҡа килһә, улар ашарға яраҡлы, тип һанала. 2 - 7 сантиметр оҙонлоғонда ғына булған шытымдар гәҙәти үҫентеләрҙән тышҡы төҫө менән генә түгел, ә химик составының күпкә файҙалыраҡ булыуы менән дә айырыла. Микрогрин исеме аҫтында йөрөтөлгән шытымдарҙа цитокин (үҫеш гормоны, күҙәнәктәр бүленеше процесын активлаштырыусы) һәм ауксин (шулай уҡ үҫешкә ҙур йоғонто яһаусы) матдәләр синтезлана. Улар түтәлдә ҙур булып үҫкән үҫемлектәрҙә лә бар, ләкин күпкә әҙерәк.

Микрогриндар сәләмәт тормош алып барыусылар тарафынан ҙур һөрау менән файҙалана. Уларҙы салат, аш, коктейль, смузиларға һалып ҡулланалар.

Микройәшеллек менән ҙур масштабта шөғөлләнеүселәр уны ресторан һәм кафеларға күмәртәләп һата. Уңыш алыр өсөн, гәҙәттә, 5-7 көн етә. Бер аҙнанан арттырмайынса үҫкән йәшеллекте һатыуға сығарырға кәрәк. Мин бер боксты 100 һумдан һата башлағайным, хәҙер 150 һум менән тәкдим итәм. Әлеге көндә ассортиментта гәрсис (горчица), кинза, редис, борсаҡ, руколла үҫтерәм. Аҙнаһына 2000-2500 һум аҡса эшләйем. Артыҡ көс талап итмәгән, юлға аҡса сығармаған, реклама өсөн күп сығым китмәгән шөғөл өсөн ярайһы килем, тип иҫәпләйем. Артабан ассортиментты тағы ла арттырырға уйлайым.

Микройәшеллек үҫтереү менән шөғөлләнә башлау ҙур сығымдар талап итмәй. Уларҙы тупраҡта, ҡағыҙҙа, мамыҡта, марляла һәм банкаларҙа үҫтерергә була. Уңыш алыр өсөн, гәҙәттә, 5-7 көн китә. Үҫтереү ысулдарын һәм юлдарын интернет селтәрендә ҡарарға мөмкин, барыһы ла тулы һәм аңлайышлы итеп теркәлгән.

Эшҡыуарлыҡтың төп талабы - ныҡышмаллыҡ, тип уйлайым. Бер тапҡыр килеп сыҡмаған икән, ташлап ҡуйма, тағы ла эшләп ҡарап, ошо эшмәкәрлектең бөтә нескәлектәрен өйрәнеп, тағы ла тәүәккәлләгәндә, барыһын да булдырырға мөмкин.

**Мөнир СӘЙФЕТДИНОВ.**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры Ирек Сәғитов гәҙәттән тыш хәлдәрҙе иҫкәртеү һәм бөтөрөү буйынса комиссияның ашығыс ултырышын үткәрҙе. Быға 23 июндә республика биләмәһендә сыҡҡан көслө дауыл сәбәпсе булды. Һөҙөмтәлә 14 муниципалитет зыян күргән. Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте премьер-министры район властарына тиҙ арала зыян күргән барлыҡ ҡаралтыларҙы яңыртырға һәм емерелгән объект хужаларына ярҙам күрһәтергә ҡушты.

✓Башҡорт дәүләт медицина университеты табиптары йоғошло сирҙәр госпиталдәрендә эшләү өсөн Бүрәт Республикаһына юлланды. Бригада составында анестезиолог-реаниматологтар, инфекционистар бар. Командировкаға бөтәһе һигеҙ кеше юлланды. Төркөм етәксеһе - тәжрибәле анестезиолог-реаниматолог Никита Здорик.

✓Учалы районы Яңы Байрамғол ауылында "Башҡортостандың алтын тауышы", Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы Әхәт Мортазин исемендәге премия тапшырылды. Премияны Әхәт Мортазиндың ғаиләһе - хәләл ефете Тәнзилә Үлмәсбаева, уның балалары булдырған. Быйыл Әхәт Мортазин исемендәге премияларға тарих уҡытыусыһы Рәмзиә Шаһиева һәм уҡыусы, олимпиадалар еңеүсеһе Тимур Вәлиуллин лайыҡ булды. Мортазиндар ғаиләһенең үтенесе буйынса, премияны Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе Эльвира Айытҡолова тапшырҙы.

✓Республика Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙа кадрҙар үҙгәреше планлаштырыла. "Быға тиклем республиканың Фәндәр академияһын етәкләгән билдәле ғалим Әлфис Ғаязов даими нигеҙҙә Дәүләт Йыйылышының Мәғариф, мәҙәниәт, йәштәр сәйәсәте һәм спорт комитетында эшен дауам итер тип күҙаллана. Уның фәндә, белем биреү системаһында туплаған бай тәжрибәһе юғары белем системаһы реформаһы менән бәйле мәсьәләләргә күберәк иғтибар бүлергә мөмкинлек бирә. Парламентта Әлфис Ғаязов ҡатнашлығында фән буйынса парламент тыңлауҙары планлаштырыла", - тине Константин Толкачев.

✓Башҡортостандың Әбйәлил районында болон күбәләгенең үрсеүенә бәйле гәҙәттән тыш хәл иғлан ителде. Болон күбәләге - Евразияның дала зонаһында ҡурҡыныс ҡоротҡостарҙың береһе. Күбәйгән осраҡта улар ауыл хужалығы культураларына етди зыян килтерә. Күбәләктәр йышыраҡ шәкәр сөгөлдөрөн, көнбағышты, люцернаны, кукурузды, йәшелсә культураларын зыянлай. Сүп үләндәре менән дә туҡлана.

*ҠЫҪҠАСА*

# ЙӘШ БЫУЫНҒА МӨРӘЖӘҒӘТ

✓ **"Рәсәй" медиаүҙәгендәге матбуғат конференцияһында Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова байрамда коронавирус инфекцияһы таралыу хәүефенә бәйле юғары хәүефһеҙлек саралары күреләсәк тип белдерҙе.** Ул VI Бөтә донъя фольклориадаһында йәш быуынға мөрәжәғәт менән капсула булдырыласағы хаҡында ла хәбәр итте. "Фольклориаданы ябыу тантанаһы "Ғүмер ағасы. Йәш быуынға мөрәжәғәт" тип атала. Беҙҙе тамырҙарыбыҙ берләштерә. Фольклорҙы белмәйенсә тороп, артабан үҫешә алмайбыҙ, быны онотмаҫҡа тейешбеҙ. Киләсәк быуынға мөрәжәғәт менән ике капсула эшләү күҙаллана. Был мөрәжәғәттә быйылғы Фольклориадала ҡатнашҡан барлыҡ илдәрҙең вәкилдәре үҙ ҡултамғаһын ҡалдыра. Бер капсула - CIOFF ойошмаһына, икенсеһе Милли музейға тапшырыла", - тине министр. Ябыу тантанаһында Фольклориада флагын Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренә тапшырыуҙары ихтимал. Әммә был мәсьәлә аҙағынаса хәл ителмәгәнлектән, флаг CIOFF ойошмаһына бирелә. Һуңғы мәғлүмәт буйынса, фестивалгә 38 ил вәкиле килә, күптән түгел Непал ансамбленең килә алмауы тураһында билдәле булды. Бер нисә йыл әҙерлек эше алып барылған байрамда 85 ил ҡатнашырға тейеш ине. Ләкин эпидемиологик хәлгә бәйле уларҙың һаны ике тапҡырҙан ашыуға кәмене.

✓ **Республикала берҙәм дәүләт имтихандары һөҙөмтәләре 8 июлдә билдәле була.** Бөгөнгә Башҡортостанда дүрт уҡыусы ике һәм унан күберәк фәндәрҙән 100 балл алған, 89-ы йөҙ балға яҙған, тип хәбәр итте республика мәғариф һәм фән министрының беренсе урынбаҫары Илдар Мәүлитбирҙин хөкүмәттә уҙған оператив кәңәшмәлә. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров министрлыҡҡа йөҙ балл алғандар республиканың юғары уҡыу йорттарына ингән осраҡта, уларҙы дәртләндереү мәсьәләһен ҡарарға ҡушты. "Һәләтле йәштәрҙе үҙебеҙҙә ҡалдырырға теләр инек, - тине республика етәксеһе. - Матди дәртләндереү системаһын уйлағыҙ. Бының 100 мең һумдан башлап өҫтәмә йыллыҡ гранттар булыуы мөмкин. Аҡсаны иҫәпләрбеҙ, бәлки, күберәк бирербеҙ". Ул мәсьәләне оҙаҡҡа һуҙмаҫҡа ҡушты, сөнки илдең башҡа университеттары ошондай абитуриенттарға "һунар башлаған".

✓ **Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләрендә ер мөнәсәбәттәре режимын йомшартҡан закон ҡабул итте.** Әгәр был һаҡ режимына ҡаршы килмәһә, ер участкалары халыҡтың милкендә ҡала. Шулай уҡ махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләрендә ерҙе ҡуртымға алырға мөмкин. "Республикала һаҡланған тәбиғәт биләмәләре күп, уларҙа һәр ваҡыт халыҡ йәшәне. Махсус һаҡ режимы индерелгәс, уларҙың мәнфәғәттәре сикләнде. Көнкүреш, баҡса эштәре менән шөғөлләнеү, мал ҡарау мөмкинлеге кәмей. Ошо тораҡ пункттарҙың үҫеше туҡтаны: ерҙе милеккә алырға ярамағас, унда мәктәп йәки дауахана төҙөп булмай. Һөҙөмтәлә кешеләрҙең белем, медицина ярҙамы алыуға хоҡуғы боҙола", - тип әлеге закондың етешһеҙлектәрен әйтеп үтте Башҡортостан парламенты рәйесе Константин Толкачев. Яңы нормалар ҡурсаулыҡтарҙа ғәмәлдә булмай, тип билдәләне ул.

*ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ!*

# РӘСӘЙ ХАЛҠЫ...

## тарихи-мәҙәни тамырҙары менән бөйөк

**РФ Президенты Владимир Путин менән тура бәйләнеш быйыл 18-се тапҡыр булып үтте. 30 июнь иртәнге сәғәттәргә илдең төрлө төбәктәренән миллион ярымдан ашыу һорау килгәйне инде. Һорауҙарҙы "Мәскәү - Путинға" мобиль ҡушымтаһы аша теләгән һәр кеше бирә алды, был ҡушымта буйынса студия менән тура видеобәйләнешкә лә сығып булды. Шулай уҡ махсус сайт һәм телефон аша ла ебәрергә мөмкинлек бирелде.**



Быйылғы тура бәйләнеш алдан уҡ көтөлгәнсә, бөтөн донъяны борсоған көнүҙәк тема - коронавирустың яңы тулҡыны хаҡында башланып китте: "Ни өсөн беҙҙә вакцинация кешенең үҙ теләге буйынса эшләнә, тип әйтелеүгә ҡарамаҫтан, күп ойошма һәм предприятиеларҙа эшләүселәрҙең өстән ике өлөшө самаһы мәжбүри прививка эшләтергә тейеш? Күмәк кешеләр ҡатнашлығында саралар үткәреү тыйылған ваҡытта беҙҙә Евро-2020 чемпионаты үткәрелә. Ҡайҙа бында аныҡ сиктәре булған ҡағиҙәләр, ябай халыҡ быны аңларға теләй?" - булды һорау.

"Беренсенән, футбол буйынса ярыш үткәреү илдең ҙур спорт сараһын ойошторууға йөкләмә алыуы менән бәйле, - тип яуап бирҙе В.Путин. - Бында аңлашылмаған бер ни ҙә юҡ, бында закон нормаларына иғтибар итергә генә кәрәк. Ваҡытында мин мәжбүри вакцинацияға ҡаршы булыуым тураһында әйткәйнем инде, әле лә ошо фекеремдән кире ҡайтмайым. Ләкин бында халыҡты иммун йәһәтенән һаҡлау буйынса 1998 йылғы законды ҡарарға кәрәк. Унда прививкаларҙың дөйөм милли календары хаҡында һүҙ бара һәм бына был - мәжбүри вакцинация. Ковид инфекцияһына ҡаршы вакцинация был бүлеккә индерелмәне, шунға өсөн ул мәжбүри түгел, ләкин Рәсәй Федерацияһының айырым төбәктәрендә баш санитар табиптар менән төбәк етәкселәре ҡайһы бер категория граждандар өсөн мәжбүри вакцинация тәртибе индерә ала. Әлеге көнгә 23 млн кеше прививка эшләткән һәм бының менән бәйле фажиғәле хәлдәр юҡ. Минең ниндәй вакцина ҡаҙатыуым хаҡында бик күп һорауҙар бирәләр, ләкин бер вакцинаны икенсеһе алдында өҫтөнөрәк итеп күрһәтеү булмаһын өсөн был хаҡта әйтмәүемде һорағайнылар. Был процедураның видеоһын һалыуҙы иһә мин мөһим ваҡиға тип ҡараманым. Мин эшләткән вакцинаның тәүгеһе Новосибирскиҙың "Вектор" үҙәге етештергән ЭпиВакКорона ине, икенсеһе - "Спутник V". Улар икеһе лә һәйбәт. Беҙҙең Ҡораллы Көстәр ҙә "Спутник V" вакцинаһын ала. Шуны әйтер инем: тәүге ҡаҙатыуҙан һуң бер ни ҙә һиҙелмәне, укол эшләгән урын бер аҙ ғына үҙен һиҙҙереп торҙо. Икенсеһенән һуң төндә температура 37,2-гә күтәрелде һәм иртәгәһенә бөтәһе лә яҡшы булды. Һеҙгә лә кәңәш итәм, эшләтегеҙ, бының бер ниндәй ҡурҡынысы ла юҡ..."

Президентҡа бирелгән киләһе һорау ошо уҡ теманы дауам итте: "Мәскәү мәктәптәренең береһендә, хроник сирле булыу сәбәпле прививка эшләтеү ярамағанлығы хаҡында белешмәһе була тороп та, унда эшләүсе уҡытыусыны эштән ҡыуыу менән янайҙар, был законлымы?" Был һорауға Владимир Владимирович: "Юҡ, законлы түгел", - тип яуап бирҙе. Ковид менән ауырығандар өсөн бушлай реабилитация һәм бының өсөн аҡса, тейешле медицина ҡорамалдары алыу хаҡында ла һүҙ барҙы.

Украина хаҡындағы һорауға яуап биреп, Путин был ил халҡының беҙгә дошман булған исемлектә тормауы, украин һәм рус халҡының туғандашлығы, ә бына был ил етәкселегенең беҙгә дуҫ булмаған сәйәсәт алып барыуы, үҙ илен тулыһынса тышҡы идара ҡулына тапшырып ҡуйыуы хаҡында әйтте һәм Зеленский менән осрашыуҙан мәғәнә күрмәүе, шулай ҙа тема булған хәлдә һөйләшеүҙән баш тартмауын белдерҙе.

Тура бәйләнештә һөйләшеүҙәр төрлө темаларға үрелеп дауам итте. Айырыуса бөгөнгө көн аҙыҡ-түлек, йәшелсәгә (кишерҙең килоһы 110 һум, май хаҡы - 500-600 һ.б) хаҡтарҙың артыуы хаҡында дәғүәләр яңғыраны. Быға яуап итеп, В. Путин: "Төп сәбәп - нигеҙҙә ковид эҙемтәһе булараҡ, етештереү кимәленең кәмеүе, эш урындары һәм эшсе көстәрҙең ҡыҫҡартылыуы, - тине. - Дәүләт тарафынан ваҡытында иғтибар биреп еткерелмәү ҙә бар, был йәһәттән саралар күрелә. Былтыр беҙгә үҙебеҙ үҫтергән йәшелсә етмәй ҡалды, быйыл иһә илдә 22 тонна картуф етештереү ҡарала. Икмәк-булка ризыҡтары, көнбағыш майы, шәкәргә хаҡтар бер кимәлдә һаҡланып килә, башҡа төр аҙыҡ-түлек буйынса эшләргә кәрәк".

Ауыл хужалығы темаһын дауам итеп, Башҡортостандағы ҡоролоҡ, шул арҡала иген культураларының юҡҡа сығыуы, мал-тыуар ҡырылыуы хаҡында Өфөнән килгән хәбәр мелиорация мәсьәләһен күтәрҙе. "Беҙ был республикалағы ауыл хужалығы эшсәндәре хеҙмәте менән ғорурланабыҙ, - тине президент. - Урында экспорт буйынса ла яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшәләр. Хеҙмәт етештереүсәнлеге күтәрелә, тауар етештереү айырыуса үҫә, бер аҙ өҫтәмә ярҙам ғына талап ителә. Мелиорация мәсьәләһе бик мөһим, бигерәк тә климат үҙгәрештәрен иҫәпкә алғанда. Был һәм башҡа йүнәлештәрҙә тырышлыҡты артабан арттырасаҡбыҙ..."

Осрашыу һуңында бирелгән: "Киләсәк быуынға ниндәй Рәсәйҙе тапшырырға хыял итәһегеҙ?" - тигән һорау халыҡтың үҙ Президенты менән күҙмә-күҙ был һөйләшеүенә үҙенсәлекле һығымта булып яңғыраны: "Шуныһы ҡыҙғаныс, ҡасандыр беҙҙең уртаҡ ватаныбыҙ - Советтар Союзы тарҡалыуға дусар ителде, ләкин бөгөн уны тергеҙеүҙең мәғәнәһе юҡ һәм был мөмкин дә түгел. Һәм был маҡсатҡа ла ярашлы түгел, - тине Президент. - Сәнәғәт ҡеүәттәре һәм иҡтисадының яртыһын, халҡын һәм инфраструктура йәһәтенән үҫешкән биләмәләрен юғалтыуына ҡарамаҫтан, Рәсәй территорияһы буйынса донъяла иң ҙур ил булып ҡала. Икенсенән, һәр төрлө минераль ресурстары менән дә ул, һис шикһеҙ, донъя хазинаһына тиң, әммә Рәсәйҙең алтын хазинаһы - уның халҡы. Рәсәй халҡы юғары кимәлдә рухлы халыҡ, үҙенең тарихи һәм мәҙәни тамырҙары менән бөйөк. Был бик мөһим. Әгәр беҙ илде тышҡы тетрәндереүҙәргә бирешмәй, эске тотороҡлолоҡҡа өлгәшәбеҙ икән, уңыш беҙҙең ҡулдарҙа буласаҡ. Беҙ бөйөк илдә йәшәйбеҙ. Һәм граждандарҙың бына ошо эске инаныуы, Рәсәйгә эске мөнәсәбәте бөтөн маҡсаттарыбыҙға ла өлгәшерлек нигеҙ булып тора", - тип тамамланы һүҙен Владимир Путин.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓4 июлдә сәғәт киске 5-тә милли кейем парады башлана. Ҡатнашыусылар М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры тапҡырынан З.Вәлиди урамы буйлап үтеп, "Торатау" Конгресс-холы алдындағы амфитеатрға тиклем килә һәм Дуҫлыҡ әйлән-бәйләненә теҙелә. Әйлән-бәйлән Өфө амфитеатрында ойошторолған "Фольклориада йөрәге" тип аталған төп майҙандың эшенә старт бирә.

✓Баш ҡала хакимиәте хеҙмәткәрҙәренең 70 проценттан ашыуы коронавирустан прививка эшләткән. Билдәләнеүенсә, 29 июнгә Өфөлә 123,5 мең кеше вакцинацияны тулыһынса тамамлаған, был прививка яһатырға тейешлеләрҙең 21 процентын тәшкил итә. Дөйөм алғанда, ҡалала 588 мең кеше ковидтан прививка алырға тейеш. Ҡаланың ҙур предприятиеларында ла иммунизация дауам итә, 30 меңдән ашыу хеҙмәткәр прививка яһатҡан. Мәҙәниәт учреждениеларында хеҙмәткәрҙәрҙең - 42 проценты, белем биреү учреждениеларында 44,5 проценты вакцина алған.

✓Башҡортостан территорияһында коронавирус инфекцияһының артабан таралыуына юл ҡуймау өсөн барлыҡ транспорт предприятиеларына транспорт салонында көн һайын санитар эшкәртеү үткәреү ҡушылған. Профилактик рейдтар дауам итә. Мәғлүм булыуынса, битлек режимын боҙоусыларға, водитель булһынмы ул йәки пассажирмы, тәүге тапҡыр 1 меңдән 3 меңгә тиклем штраф һалына, икенсе тапҡыр был күләм 3-5 мең һум. Вазифалы кешеләр өсөн беренсе тапҡыр - 5-15 мең һум, ҡабаттан эләккәндә - 15-30 мең һум. Ойошма һәм предприятиелар өсөн - 50-100 мең һәм 100-200 мең һум.

✓Өфөлә тура эфирҙа яңы коронавирус инфекцияһынан прививка яһатҡандар араһында фатир уйнатылды. Хәбәр итеүҙәренсә, супербүләк - бер бүлмәле фатир хужаһы - Өфөнән Тамара Рафиҡова. Ул 28 майҙа ҡаланың 8-се ҡала дауаханаһында прививка эшләткән. "Сәләмәт Өфө" акцияһында ҡатнашыусылар араһында ла 10 смартфон уйнатылды. Ойоштороусыларҙың мәғлүмәттәре буйынса, акцияның сайтында 38 631 флаер теркәлгән.

✓Башҡортостан IX "Йәш профессионалдар" (WorldSkills Russia) милли чемпионаты финалы 21 июлдә "Өфө-Арена" майҙансығында асыла. Уны ябыу тантанаһы 25 июлгә тәғәйенләнгән.Бынан алда "Башинформ" әлегә Өфөлә чемпионат уҙғарыу тураһында ҡарар ҡабул ителмәүе тураһында хәбәр иткәйне.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✔ *Фольклориада йәшәп килгән йылдар буйы уның Рәсәйҙә үткәрелгәне юҡ ине әле. Фольклориада мәҙәниәтте һаҡлау мәнфәғәтен күҙәткән кешеләр берләшеп бер майҙанға йыйылыу мөмкинлеген биргән быуат ваҡиғаһы буласаҡ.*



БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

**3-10 июль Башҡортостанда үтәсәк VI Бөтөн донъя фольклориадаһы фольклор ижадының үҙенсәлекле олимпиадаһы ул. Унан беҙ нимәләр көтәбеҙ? Ошо хаҡта Республика халыҡ ижады үҙәгенең генераль директоры, Фольклориадаға әҙерлек һәм уны үткәреү буйынса дирекцияның башҡарыусы директоры Артур ӘЛИБӘКОВ һөйләй.**

# БЫУАТ ВАҠИҒАҺЫ




**Нисә ил ҡатнаша?** Киң масштаблы был проектта ҡырҡҡа яҡын ил үҙенең мәҙәниәтен һәм традицияларын күрһәтәсәк. Улар араһында Австрия, Греция, Египет, Испания, Коста-Рика, Мексика, Берләшкән Ғәрәп Әмирлеге, Панама, Перу, Румыния, Того, Франция, АҠШ, Чили, Швейцария, Эквадор, Эстония һәм башҡалар. Рәсми делегация һәм журналистар менән бергә бөтәһе 1500 кеше ҡатнаша.

**Хәүефһеҙлек хаҡында.** Фольклориада ҡәтғи санитар нормаларҙы һаҡлап үткәреләсәк. Ҡатнашыусыларҙың бөтәһе лә ПЦР-тест тапшыра, даими рәүештә температура үлсәнәсәк.

**Асыу һәм ябыу тантанаһы ҡайҙа һәм нисек үтә?** Фольклориаданы тантаналы асыу һәм ябыу "Өфө-Арена" боҙ майҙанында үтә. Унда 800-ҙән ашыу артист ҡатнаша. Йола буйынса, асыу тантанаһында ҡабул итеүсе яҡ ил һәм халыҡ традицияларын сағылдырыусы бай һәм матур программа менән сығыш яһай. Тамашасылар алдында Рәсәйҙең халыҡ артисы Надежда Бабкина һәм "Рус йыры" ансамбле, Кубань дәүләт академия казак хоры, "Гжель" Мәскәү дәүләт академия бейеү театры, Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы Асҡар Абдразаҡов, Башҡортостандың профессиональ һәм үҙешмәкәр ижад коллективтары сығыш яһаясаҡ. Тамашасыларҙың сараны асыу тантанаһын тура эфирҙа Өфөнөң өс паркында: "Тулҡын", "Беренсе май" һәм Дим районының мәҙәниәт һәм ял паркында ҡарау мөмкинлеге бар. 10 июлдә "Торатау" конгресс-холы амфитеатрында Фольклориада тамамлана. Уны ябыу тантанаһы "Тормош ағасы. Килер быуындарға мөрәжәғәт" исемле театрлаштырылған пролог менән башлана, артабан М.Е.Пятницкий исемендәге Рус дәүләт академия халыҡ хоры менән дауам итә, The No Smoking Orchestra популяр серб фолк-рок төркөмө һәм Эмир Кустурицаның сығышы көтөлә. Байрамды ябыу тантанаһында бөтәһе 500-ҙән ашыу артист ҡатнаша. Тантаналы сарала сығыштар һуңынан Фольклориада флагы төшөрөлә һәм байрам салют, лазер-шоу менән тамамлана.

**Йондоҙҙарҙан кемдәр килә?** Концерт программалары республиканың 22 ҡала һәм райондарында барасаҡ. Уларҙың бөтәһе лә асыҡ һауала үтәсәк, инеү бушлай, ирекле. Иң ҙур концерт майҙаны - "Торатау" конгресс-холының амфитеатры. Бында проектта ҡатнашыусыларҙың ғына түгел, ә донъя кимәлендәге профессиональ йондоҙҙарҙың сығышын да тамаша ҡылырға мөмкин буласаҡ. Концерттар көн һайын 19 сәғәттә башланып, 23 сәғәттә тамамлана.

**Байрам көндәлеге:**

**4 июль.** Рәсәйҙең халыҡ артисы Надежда Бабкина һәм "Рус йыры" ансамбле, "Вайнах" Чечен дәүләт бейеү ансамбле, Кубань дәүләт академия казак хоры, Олена Утай.

**5 июль.** Рәсәй йырсыһы Тина Кузнецова һәм Eventa Zventana фольклор-проекты.

**6 июль.** 2021 йылғы Евровидение конкурсында Рәсәйҙән ҡатнашыусы йырсы Манижа.

**7 июль.** Plantec (Франция) төркөмө, Мәскәүҙән һорнайсылар оркестры.

**8 июль.** Ҡаҙағстандан Ulutau этно-рок төркөмө.

**9 июль.** The Hatters джипси-фолк-рок төркөмө.

**10 июль** М.Е.Пятницкий исемендәге Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ һәм Халыҡтар дуҫлығы орденды дәүләт академия рус халыҡ хоры, Эмир Кустурица һәм The No Smoking Orchestra (Сербия).

**Концерт сығыштарынан тыш, Фольклориадала ҡатнашыусылар һәм ҡунаҡтар өсөн эшлекле һәм мәҙәни программа әҙерләнгән:**

- Донъя халыҡтары битлектәре күргәҙмәһе (4-10 июль БР Милли музейҙа)

- Халыҡ музыка ҡоралдары күргәҙмәһе (4-10 июль "Торатау" конгресс-холында)

- CIOFF рухи мәҙәни мираҫты һаҡлау мәсьәләләре буйынса халыҡ-ара конференция (4 июль "Торатау" конгресс-холында)

- Фольклориада барған бөтә көндәрҙә лә "Торатау" конгресс-холы алдындағы майҙанда кәсепселек һәм һөнәрселек оҫталарының халыҡ-ара күргәҙмәһе була.

**Фольклориадала еңеүселәр билдәләнәме?** Олимпиада менән сағыштырыуҙарға ҡарамаҫтан, Фольклориадала ярыш рухы юҡ, бында бөтәһе лә үҙ-ара ихтирам, гармония һәм донъя халыҡтарының бер-береһе менән аралашыуына нигеҙләнә. Донъя илдәренең фольклор коллективтары бер-береһен үҙҙәренең музыка, бейеү, декоратив сәнғәт һәм һөнәрселек оҫталыҡтары, халыҡ уйындары һәм йолалары менән таныштыра, ә иң яҡшыһы, кем икәнде билдәләмәй.

**Рекордтар ҡуйыласаҡмы?** Эйе, Фольклориада сиктәрендә 4 июль Өфөлә үтәсәк "Донъя халыҡтары хороводы"н Донъяның рекордтар китабына индереү ҡарала. Фольклориадала ҡатнашыусы донъяның ҡырҡлаған иле һәм Башҡортостанда йәшәүсе халыҡтар донъя рекорды ҡуясаҡ, тип көтөлә.

**Сығыштарҙы йә уларҙың яҙмаларын ҡайҙа ҡарарға була?** Фестивалгә килә алмаған тамашасылар өсөн урындағы телеканалдарҙа, шул иҫәптән БСТ-ла һәм рәсми сайттарҙа, Бәйләнештә, Инстаграмда тура трансляциялар алып барыласаҡ.

**Рәсәй һәм Башҡортостан өсөн Фольклориада нимә бирәсәк?** Фольклориада - ул илдәр араһында мәҙәниәт һәм тәжрибә уртаҡлашыуға йүнәлтелгән социаль проект, йәғни башҡаларҙы ҡарау, үҙеңде күрһәтеү. Фольклориада йәшәп килгән йылдар буйы уның Рәсәйҙә үткәрелгәне юҡ ине әле. Фольклориада мәҙәниәтте һаҡлау мәнфәғәтен күҙәткән кешеләр берләшеп бер майҙанға йыйылыу мөмкинлеген биргән быуат ваҡиғаһы буласаҡ.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ТОС ЯРҘАММЫ?

**1 июлдән Рәсәйҙең Пенсия фонды йөклөлөктөң иртә осоронда иҫәпкә торған йөклө ҡатын-ҡыҙҙар һәм 8-17 йәшлек бала тәрбиәләгән яңғыҙ ата-әсәләр өсөн яңы айлыҡ пособиеларға ғаризалар ҡабул итә башлай.**

Ғаризаны Дәүләт хеҙмәттәре порталында йәки йәшәгән урын буйынса Пенсия фондының клиент хеҙмәтендә бирергә була. "Балалы граждандарға дәүләт пособиелары тураһында" федераль законға индерелгән төҙәтмәләргә ярашлы, яңы түләүҙәр 8-16 йәшлек балаһын яңғыҙы тәрбиәләгән атайға йәки әсәйгә, шулай уҡ йөклөлөктөң иртә осоронда медицина ойошмаһына иҫәпкә баҫҡан ҡатын-ҡыҙҙарға бирелә", - тиелә Пенсия фонды белдереүендә.

Ике түләүҙең дә күләме һәр төбәктә билдәләнгән йәшәү минимумына ярашлы раҫлана. Тулы булмаған ғаиләләргә түләү менән бәйле осраҡта балаға йәшәү минимумының - 50 проценты, йөклөлөк буйынса түләүгә килгәндә иһә хеҙмәт йәшендәге кешегә йәшәү минимумының 50 проценты тураһында һүҙ бара. Пособие алыу өсөн төп шарт - ғаиләнең килем күләме. Ҡағыҙәләр буйынса ул республикала йән башына йәшәү минимумынан артмаҫҡа тейеш. Пособие мохтажлыҡты комплекслы баһалауҙы иҫәпкә алып тәғәйенләнә. Мохтажлыҡты баһалау өсөн критерийҙар һәм ғаризаларҙы ҡарау ваҡыты Рәсәй Хөкүмәтенең тейешле ҡарары баҫылып сыҡҡандан һуң барлыҡҡа килә.

## ИҪӘПЛЕНЕҢ...

**Рәсәй Хөкүмәте 2021 йылдың 1 октябренән 31-енә тиклем Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу ваҡытын билдәләне.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, быйыл февралдә властар, пандемияның дауам итеүен иҫәпкә алып, хәүефһеҙлекте арттырыу өсөн Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуҙы сентябрҙә уҙғарырға хәл иткәйне. Яңыраҡ хөкүмәт ҡарары яңы ваҡытты билдәләне - 2021 йылдың 1-31 октябре. Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуҙың медиаофисында белдереүҙәренсә, яңы срок Берләшкән Милләттәр ойошмаһы тәҡдим иткән иҫәп алыу раунды сиктәрендә ҡалырға мөмкинлек бирә. Бынан тыш, был ваҡытта рәсәйҙәрҙең күпселеге отпускынан ҡайта. Бындай шарттарҙа Росстат мәғлүмәттәр йыйыуҙың яңы - һанлы ысулына өмөт бағлай. Иҫәп алыу барышында Рәсәй халҡы Дәүләт хеҙмәттәре порталында, шулай уҡ күп функциялы үҙәк бүлексәләрендә исемлеккә теркәлергә мөмкин. Интернет-иҫәп алыу - Рәсәй өсөн яңы иҫәп алыу алымы. Респондент һәм электрон иҫәп алыу ҡағыҙы араһында аралашсы юҡ. "Технологик яҡтан һанлы иҫәп алыуға әҙербеҙ: мәғлүмәт йыйыу, тапшырыу һәм эшкәртеү өсөн IT-система булдырылды, ул һынауҙы уңышлы үтте, электрон планшеттар төбәктәргә ебәрелде һәм эшкә әҙер", - тип белдерҙе Росстат етәксеһе урынбаҫары Павел Смелов.

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Һалҡын тейгәндә

❖ Һалҡын тейеүҙән һаҡланыу өсөн 1-әр әфлисун һәм лимонды йыуып, ҡабығынан әрсемәйсә ит турағыс аша үткәрергә. Кәрәккәнсә шәкәр ҡушырға, яҡшылап болғарға, һыуыҡтыҡта һаҡларға. 1-әр балғалаҡ тәмлекәсте көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 15-20 минут алда ашарға. Йөйгеһен генә туктап тороп, ошо рәүешле оҙаҡ йылдар организмды витаминдар менән байытыу файҙалы.

❖ Һыуыҡ йәки тымау тейеүен һиҙгәс тә, табандарға горчичниктар ҡуйырға кәрәк. Фланель тукыма менән урап бәйләп, йөн ойоҡ кейергә һәм түҙгән тиклем торорға. Шунан горчичниктарҙы алып, күпмелер ваҡыт шәп-шәп атлап йөрөргә. Был рәүешле йоҡлар алдынан дауаланыу яҡшыраҡ.

❖ Һалҡын тейгәс тә ярты литр эшкәртелмәгән һөттө бер аҙ йылытып, шуға бер яңы йомортҡа һытырға, 1-әр балғалаҡ аҡ май һәм бал өҫтәргә. Барыһын да яҡшы бутап, төнгөләккә эсеп ятырға. Иртәнсәккә ауырыҡһыныу һәм тымау бөтәсәк.

### Быуын шеше

❖ Быуын шешен (артрит) дауалау өсөн 1 ҡалаҡ ваҡланған тал ҡайырыһына (йәки нәҙек кенә йәш ботаҡтарына) 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Талғын утта 5 минутҡа тиклем торорға. Көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә. Шулай уҡ әҙерләнгән, әммә ҡатыраҡ сыҡҡан ҡайнатманы шифалы ваннаға өҫтәргә лә ярай.

❖ Мәрүәр (бузина) сәскәһен, кесерткән япрағын, петрушка тамырын, тал ҡайырыһын бер тигеҙ нисбәттә алырға. Йыйылманы ваҡлап, 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 5 минут талғын утта ҡайнатырға һәм һыуытып һөҙөргә. Көнөнә 2-шәр стакан ҡайнатма эсергә.

### Балалар йүтәле

❖ Ярты стакан баланды йыуып, 1 стакан бал өҫтәп болғарға. Көнөнә 4 тапҡыр ашағандан һуң 1-әр балғалаҡ ашарға. Йүтәл тиҙ генә үтә. Ҡатышманы һыуыҡтыҡта һаҡларға кәрәк.

❖ 10 грамм баланға 200 мл ҡайнар һыу ҡойоп, 40 минут төнәтергә. Йыйы көйөнсә көнөнә 1/3 стакан эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✔ *Халҡыбыҙҙың рухи һәм матди мираҫын һаҡлап ҡалыу өсөн әүҙемерәк булырға кәрәк бөгөн. Башта уны дөрөҫ сағылдыра алыу маҡсатында тарихты, мәҙәниәтте, этнографияны тәрән өйрәнеү мөһим.*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ ТУҠЫМАҺЫ

Биҙәү-ҡулланма сәнғәте һәм милли кейемдәргә арналған тәүге этнографик хеҙмәттәрҙә күскенсе башҡорттарҙың йәшәйешен быуаттар дауамында тәбиғи хужалыҡ тәьмин итеүе тураһындағы фекер өҫтөнлөк итә, бөтә кәрәкле әйберҙәр йорт шарттарында етештерелгән, тип ҡарала. Тик капитализм осоронда тауар-аҡса бәйләнештәре әүҙем үҫешеүе генә көнкүрештә фабрикала эшләнгән әйберҙәр, шул иҫәптән туҡымалар, барлыҡҡа килеүенә килтергән.

Әммә һуңғы ун йыллыҡта үткәрелгән археологик һәм тарихи тикшеренеүҙәр һөҙөмтәләре малсылыҡ менән шөғөлләнгән күскенселәрҙең тар ҡатламына алмашыу һәм һатыу итеү эше уларҙың үҫешенең башланғыс осоронда уҡ хас булыуын күрһәтте. Малсылар беҙҙең эра башында Ҡытай, Персия, Урта Азияның игенселек менән шөғөлләнгән төбәктәрендә малға алмаштырып алып, кустарь ебәк һәм кизе-мамыҡ туҡымаларҙы киң ҡулланған. Беҙҙең эраның I меңъйыллығында Ҡытай сиктәрендә төрки ҡәбиләләр менән һатыу итеү өсөн алыш-биреш баҙарҙары булған. Ҡытай тарафынан ебәк төп тауар иҫәпләнгән. VIII быуатта император Сюань-цзун төрки ҡағанатына былай тип яҙа: "Бик борондан Ҡытай һәм сит ил кешеләре алыш-биреш һәм сауҙа менән бәйләнгән. Ҡытай аттар һатып алған, ә төркиҙәр Ҡытайҙан ебәк алған".

Көнсығыш һәм Көнбайыштың сауҙа бәйләнештәре ике мең йыл элек Персия һәм Кесе Азия аша әүҙем бойомға ашырыла. Рус география йәмғиәте экспедицияһы барышында (П.К. Козлов етәкселегендә) Монголия ҡурғандарында атҡарылған ҡаҙыныу эштәре һөҙөмтәһендә юғары ҡатлам хунн кешеләре ҡәберлектәрендә ҡытай ебәгенән тыш Боронғо Грек үрнәктәренән художестволы туҡымалар ҙа табылған. Ике яҡлы сауҙаға Урта Азия ла йәлеп ителгән, нәҡ уларҙың сауҙагәрҙәре (Сөғд һ.б.) бәйләнештәрҙе нығытырға ярҙам иткән. Улар төньяҡҡа - Урал алды яғына сауҙа юлын һалған.

Ҡытай йоғонтоһонда Урта Азияла ебәк етештереү үҫешкәс, яйлап малсыларҙы ҡиммәтле туҡымалар менән тәьмин итеүсе төбәккә әүерелә. Беҙҙең эраның беренсе меңъйыллыҡтарында Урта Азияға үтеп ингән һундарҙың кейемдәре ҡытай ебәгенән дә, урында етештерелгән туҡымаларҙан да тегелгән булған. Беҙҙең эраның I меңъйыллығы уртаһында Азияла ла, Европала ла Урта Азия туҡымалары Ҡытайҙыҡылар менән уңышлы конкурентлыҡ иткән. Төньяҡ Кавказдағы VII-IX быуаттарға ҡараған боронғо ҡәберлектәрҙә табылған ебәк туҡыма киҫәктәре араһында Урта Азияла етештерелгән туҡымалар 50 проценттан ашыу, ә Ҡытайҙыҡылар ни бары 18 процент тирәһе генә тәшкил иткән.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ФОЛЬКЛОРИАДА - 2021*

# ҠУНАҠТАРҒА БҮЛӘККӘ...

## ...открыткалар

**Дизайнер Арыҫлан Бикбайҙың Башҡортостанды, башҡорт халҡын, үҙебеҙҙең мәҙәниәтте, тарихты сағылдырған иҫтәлекле әйберҙәр етештереүсе шәхси "Bikbayman" студияһы ла бар. Унның менән ошо ижади эшмәкәрлеге тураһында ла һөйләштек.**

- Оҙаҡ йылдар дизайнер, рәссам булып эшләнем мин. Элегерәк төрлө сараларҙа ҡатнашыусыларға тәҡдим итерлек йүнле сувенир-маҙарҙар булманы. Ә бит беҙҙең мәҙәни мираҫыбыҙ сикһеҙ бай. Шуға, яйлап орнаменттарға тотондом, уларҙы ҡулланылышта уңайлы итер өсөн цифрлаштыра башланым. Шул ваҡытта башҡортса открыткалар эшләү мөһимлеге тураһында ла уйлап йөрөлдө, сөнки улар бөтөнләй тиерлек юҡ ине бит һатыуҙа. Яйлап ҡатыным Айгөл менән ошо ниәтте бойомға ашырҙыҡ, кешеләрҙең ыңғай баһаһын ишетеп, үҙебеҙҙең студияны ла асып ебәрҙек. Хәҙер 3-4 йыл тирәһе шөғөлләнәбеҙ, открыткаларҙан тыш, значок, магнит, брелок кеүек башҡа ваҡ сувенир продукцияларын да етештерәбеҙ. Әле башҡортса яҙыулы, үҙебеҙҙең милли атрибутика менән футболкалар етештереүҙе яйға һалырға дәртләнеп йөрөйбөҙ.

Был эшкә тотоноп китеүе бик үк еңел булманы. Теләк, эш тәжрибәһе һәм яңы идеяларҙан тыш, ниндәйҙер кимәлдә финанс белем дә кәрәк. Беҙ быға яңы өйрәнеп кенә киләбеҙ әле. Шулай ҙа йөрьәт итеп тотонған кешеләргә шуны кәңәш итер инем: үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнарға ярамай. Мөмкин тиклем сит яҡтарға сығып, төрлө фестивалдәрҙә, йәрминкәләрҙә, конкурстарҙа ҡатнашыу, ижадташтар менән танышыу, аралашыу, тәжрибә уртаҡлашыу бик кәрәк. Сөнки йөрөгән таш шымара, ти. Яңы әйберҙәргә лә күҙ төшә, бер-берендән дә өйрәнәһең, үҙеңде һәм төбәкте лә танытаһың. Беҙ мөмкин тиклем ситкә сығып йөрөргә тырышабыҙ һәм конкурстарҙа ла ҡатнашып торабыҙ. Мәҫәлән, быйтыр Бөтә Рәсәй "Туристик сувенир" конкурсында ҡатнашып, "Эконом класс. Ҡала сувениры" номинацияһында Гран-при яуланыҡ.

Иҫтәлекле әйберҙәрҙе халҡыбыҙҙың рухи һәм матди мираҫынан илһам алып ижад итәбеҙ. Уны заманса, креатив, матур итеп күрһәтеү зарур. Ошо маҡсатта әлеге мәлдә Башҡортостанда үтәсәк Бөтә донъя фольклориадаһына әүҙем әҙерлек бара. Сарала һәр ҡатнашыусыға таратып бирелә торған йыйылма әҙерләп тапшырҙыҡ. Матур ҡағыҙға төрөлгән башҡорт тематикаһындағы значок, магнит һәм открыткалар ҡунаҡтар менән Ер шарының төрлө мөйөштәренә китәсәк.

Әйткәндәй, открыткаларҙың уң яғында милли рухтағы һүрәт төшөрөлһә, һул яғына донъя картаһында Мәскәү ҡалаһын һәм Башҡортостан менән баш ҡалабыҙ Өфөнөң урынын билдәләп ҡуйҙыҡ. Сөнки быға тиклем сәйәхәт иткән дуҫтарыбыҙ юл йөрөгәндә сит ил кешеләрен халҡыбыҙ менән таныштырып йөрөү маҡсатында беҙҙең открыткаларҙы ала ине. Шунда бер ҡыҙыҡ видеояҙма килеп төштө: дуҫтар ниндәйҙер француҙға Башҡортостандың ҡайҙа урынлашыуын аңлатып маташа, ә ул Рәсәйҙе һәм уның картаһын күҙ алдына килтерә алмай хитлана. Беҙҙең ҡайҙан, кем булыуыбыҙ тураһында мәғлүмәт биреүҙе еңелләштерҙек хәҙер. Фольклориада көндәрендә яңы биҙәлешле әйберҙәр ҙә һатыуҙа буласаҡ һәм беҙҙең открыткаларҙы шунда уҡ адресатты юллау мөмкинлеге бирелә. Тик сара маршруты буйынса райондарға сығып йөрөй алмайбыҙ, шуныһы йәл, әлбиттә. Салауат Юлаев һәйкәле янындағы төп майҙанда ғына һатыу итеү нөктәһе ойоштораблыҙ. Милли батырыбыҙ тураһында һүҙ сыҡҡас, шуны ла әйтеп китмәй булмай: башҡа халыҡтар уны ихтилал етәксеһе генә түгел, шиғри күңелле, күп ҡырлы шәхес тип тә таныһын өсөн яңы идеябыҙҙы тормошҡа ашырырға ниәт итеп торабыҙ. Ҡыҙғанысҡа күрә, ҙур сараға өлгөртә алманыҡ.

Йомғаҡлап, шуны әйтер инем. Халҡыбыҙҙың рухи һәм матди мираҫын һаҡлап ҡалыу өсөн әүҙемерәк булырға кәрәк бөгөн. Башта уны дөрөҫ сағылдыра алыу маҡсатында тарихты, мәҙәниәтте, этнографияны тәрән өйрәнеү мөһим. Белемһеҙ, тота килеп нимәлер эшләй башлап та булмай. Ә инде ижад кешеһенә был өлкәлә кинәнеп эшләү өсөн материал етерлек. Шул уҡ башҡорт милли кейем комплекстарын алғанда ла иҫ киткес күп төрлө бит улар. Беҙ әле уларҙың төп ете төрөн билдәләп, шуны үҫтереп маташабыҙ, ә унан тыш әллә күпме үҙенсәлектәре бар кейемдәребеҙҙең. Уларҙағы биҙәктәр, биҙәүестәр, аксессуарҙар, һәр ырыуҙың үҙенә генә хас билдәләре - барыһы ла киләсәктә донъя кимәлендә башҡорттарҙы танытҡан брендтарға әүерелергә хоҡуҡлы.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**



✓ *Табын башлыҡтары дыуандарҙы үҙҙәренә буйһонорға тейешле икәндәрен белдерә килгән. Күрәһең, дыуан аҡһаҡалдарының үҙ шәжәрәһендә ырыуҙың баш бабаһы итеп Майҡы бей туғаны Юлбуғаны күрһәтеүе лә юҡҡа түгелдер.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЫРЫУЫБЫҘ ДЫУАН - ТАБЫНДАРҒА ТУҒАН

**Дыуан ырыуы башҡорттары йәшәгән төбәктәр бер-береһенән айырылыбыраҡ ята, уларҙың бөгөнгө варистары хәҙерге Дыуан, Мәсетле, Ҡыйғы, Саҡмағош, Кушнаренко, Благовар райондарында йәшәй. Тарихи сығанаҡтарҙа Дыуан, Дыуанай, Дыуан-Табын олоҫтары теркәлгән. 1725 йылда Башҡорт ерҙәренә йәшертен мәғлүмәт туплау өсөн ебәрелгән Көнгөр бургомистры Юхнев тәү башлап башҡорт олоҫтары реестрын төҙөй, унда Себер һәм Ҡаҙан даруғаларында бер үк исемле Дыуан олоҫтары, ә Нуғай даруғаһында Дыуан-Табын олоҫо күрһәтелгән.**



XVIII быуат тарихсыһы П.И. Рычков Әйле олоҫо составында Дыуан һәм Таҙ-Дыуан аймаҡтары, Себер даруғаһының Көҙәй олоҫонда Дыуан-Көҙәй аймағы һәм Ҡаҙан даруғаһында айырым Дыуан олоҫо булыуын билдәләй. Һуңғыһында Дыуанайсы, Әджәй-Дыуан, Ырыҫмаҡай, Баҡай һәм Талбазы аймаҡтары була. Ошо аймаҡтарҙың атамалары Кушнаренко һәм Благовар райондарында бөгөнгәсә Ырыҫмаҡай, Баҡай, Толбазы, Удел-Дыуанай кеүек топонимдарҙа һаҡланып ҡалған.

Нуғай даруғаһының Дыуан-Табын олоҫона килгәндә, ғалим Ә.З. Әсфәндиәров фаразына ярашлы, был атама кеше исеме, йәғни антропоним менән бәйле: 1654 йылға ҡараған бер сығанаҡта Теләү Дыуанов һәм Аҡтай Айтуғановтарҙың Табын олоҫондағы аҫаба ерҙәрен биләүгә грамота алыуы теркәлгән. Әммә был фараз менән икенсе бер ғалим, этнолог Р.Ғ. Кузеев килешмәй, ул Дыуан атамаһының антропоним түгел, ә баштан уҡ этноним булыуын раҫлай. Теләү Дыуан улының ғына айырым аҫабалығы тотош этник төркөм атамаһына нигеҙ була алған, тип иҫәпләү дөрөҫ булмаҫ ине. Тимәк, дыуандарҙың ата-бабалары бик киң ареалда - Себер, Ҡаҙан һәм Нуғай даруғалары территорияһында таралып йәшәгән. Ошо хаҡта Р.Ғ. Кузеев былай тип яҙа: "6-7 быуат элегерәк дыуан ҡәбиләһе Башҡортостандың иң эре берләшмәләренән була. XVII-XIX быуаттарҙа Әй йылғаһындағы дыуан ҡәбиләһенән башҡа табын ҡәбиләһе составында дыуан ырыуы, ә XVII-XVIII быуаттарҙа Ағиҙел йылғаһында, Бөрө ҡалаһы районында ҙур Дыуан олоҫо булған".

Дыуандарҙың үҙҙәренең риүәйәттәрендә бабалары Ҡормый батырҙың "көньяҡтан, Мәккә тарафынан", йәиһә "Иртыштан", "Алтайҙан" килеүе хаҡында бәйән ителә. Ул, йәнәһе, әүәл Ыҡ йылғаһы тарафтарында, шунан Ағиҙел йылғаһы буйында көн итеп, унан һуң 13 улы менән Әй йылғаһы үҙәненә күсеп киткән.

Р.Ғ. Кузеев "дыуан" этнонимының килеп сығышын монголдарҙың дурбан (dorben) исемле ҡәбилә атамаһы менән бәйләй: унынса, фонетик үҙгәрештәр һөҙөмтәһендә дурман > дурбан > дыуан теҙмәһен күҙаллап була. Әммә тарихсы Салауат Хәмиҙуллин билдәләүенсә, был фараздың ысынбарлыҡҡа тап килеүенә ышаныуы ҡыйын. "Дыуан" һәм "дурбан" атамалары мәғәнәүи яҡтан бәйләнешле түгел. Монгол телендә дурбан (дөрбэн) һүҙе дүрт һанын аңлата: дөрбэн нәҫеленә нигеҙ һалыусы Дува-Сохорҙың дүрт улы булған, шуға күрә уларҙың тоҡомо дүрт - дөрбэн тип атала башлай. Дува-Сохор үҙе Дорбун-Мәргәндең оло ағаһы була, ә уныһы Сыңғыҙ хандың туранан-тура бабаһы булған, тип иҫәпләнә. Тап шуның өсөн XIV быуатта фарсы тарихсыһы Рәшид ад-Дин дурбандарҙың монгол-нирундар (төп монголдар) категорияһына ҡарауы хаҡында яҙа. Дурман исемле ҡәбилә XVI быуатта яҙылған "Шейбани-намә" әҫәрендә лә иҫкә алына, улар күскенсе үзбәктәр дәүләтенә нигеҙ һалыусы Әбел-Хәйер хан (1412 - 1468), һуңынан уның ейәне Мөхәммәт Шейбани хан (1451 - 1510) яғында була.

Шулай итеп, башҡорт дыуандары бер нисек тә "Монголдарҙың йәшерен тарихы"нда иҫкә алынған дурбан (дөрбэн) ҡәбиләһе халҡы менән ырыуҙаш була алмай, сөнки был атаманың тарихи яҡтан артыҡ ҙур булмаған арауыҡта "дыуан" формаһын алыуы мөмкин түгел. Үзбәктәрҙең башҡорттар менән уртаҡ башҡа этник төркөмдәре атамаларында әллә ниндәй күҙгә ташланырлыҡ айырма булмауын да онотторға ярамай. Йәнә бер фәһемле факт: Нуғай Урҙаһының этник бүлемдәре араһында дурмен һәм дыуан атамалары бер үк ваҡытта осрай.

Күрәһең, дыуан этнонимы заманында Алтын Урҙала ижтимағи вазифаны аңлатҡан "дуван" һүҙе менән бәйле хасил булған: Бөйөк Урҙа тарҡалғас, айырым ханлыҡтар - Себер, Ҡырым, Ҡаҙан ханлыҡтары һәм Нуғай Урҙаһы араһындағы дипломатик бәйләнештәр "дуван" тип аталған вазифалы кешеләр тарафынан атҡарылған. Мәҫәлән, 1489 йылда Ҡаҙан ханы Мөхәммәт-Әмин ҡыҙ йәрәшеү маҡсаты менән Нуғай хакимы Муса мырҙаға Хушкилде Дуван исемле үҙ кешеһен ебәрә. Бында, моғайын, "Дуван" кеше исеме түгел, ә ул кеше биләгән вазифаны аңлата. Ғалим-тикшеренеүсе Б.-А. Кочекаев Нуғай Урҙаһында дуван вазифаһының мәғәнәһе хаҡында ошолай яҙа: "Дувандар бейҙең төрлө дипломатик һәм финанс күрһәтмәләрен үтәгән, дипломатик хат алышыу алып барған, сит ил илселәрен ҡаршы алған, бей эргәһендәге кәнәш ҡоро секретарҙары булған, сит ил кешеләре менән транзит сауҙаһынан пошлина йыйыуҙы етәкләгән, власть ҡулы аҫтындағы халыҡтан һалым йыйған һәм хөкөм атҡарыу функцияһын үтәгән".

"Дуван" термины ғәрәп телендәге "диван" һүҙенең бер аҙ үҙгәртелгән вариан-ты, тип иҫәпләнә. Был атама мосолман илдәре идаралыҡтарында башҡарма органды (канцелярия, ведомство) аңлатҡан. Казактарҙа шул уҡ "дуван" һүҙе алыштарҙа ҡулға төшкән табышты бүлешеү маҡсатында уҙғарылған йыйылышҡа ҡарата ҡулланылған. Уларҙың "дуван дуванить" тип әйтеүе талап алынған мөлкәтте бүлешеүҙе белдергән. Украинаның элекке Луганск (хәҙер ЛНР) һәм Харьков өлкәләрендә, славян һәм төрки халыҡтарының тарихи сик һыҙығы райондарында шундай уҡ топонимдар - Дуванка йылғаһы һәм Дуван исемле 5 ауыл бар.

Дыуан-Әйле ырыуы шәжәрәһенә ярашлы, уларҙың, тимәк барса дыуандарҙың баш бабаһы Майҡы бейҙең энеһе Юлбуға булған. Ә Майҡы бей табын һәм унан тармаҡланып киткән ырәктә, танып, балыҡсы, ҡаҙансы, унлар һәм ҡайпан ырыуҙарын нигеҙләгән баш баба сифатында шәжәрәләргә һәм риүәйәттәргә ингән легендар шәхес була.

Табын һәм дыуан генеалогияһын анализлау дыуандарҙың табын ырыуы халҡы менән туғандаш булыуҙарын таныуын һәм үҙҙәрен табындар менән тиң күрергә теләүен раҫларға мөмкинлек бирә. Әммә табын башлыҡтары дыуандарҙы йыш ҡына "ярлы туған" итеп ҡарап, үҙҙәренә буйһонорға тейешле икәндәрен белдерә килгән. Күрәһең, дыуан аҡһаҡалдарының үҙ шәжәрәһендә ырыуҙың баш бабаһы итеп Майҡы бей туғаны Юлбуғаны күрһәтеүе лә юҡҡа түгелдер. Был хаҡта академик Р.Ғ. Кузеев ошолай яҙған: "Шулай ҙа, тарихи-этнографик материалдар буйынса фекер йөрөтһәң, дыуан һәм табын туғандаш, әммә үҙаллы берләшмәләр булып тора". Ысынлап та, алдараҡ күрһәтелеп үткән туғандаш ырыуҙарҙың геногеографик материалдарын сағыштырып ҡараһаң, уларҙың барыһының да төп генетик маркеры бер үк булып, R1a-M198 һинд-европа гаплотөркөмөнә ҡарауын күрәбеҙ.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

---

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Батыр үҙе үлһә лә, данлы исеме иленә ҡайта

1943 йылдың ғинуар-февраль айҙарында Ҡыҙыл Армия Ленинградтан Кавказға тиклем һуҙылған ғәйәт киң фронт һыҙығында немец-фашист ғәскәрҙәренә ҡаршы көслө контрһөжүм башлай. Сталинградта Паулюс армияһының хурлыҡлы еңелеүенән һуң (бында ярты йылдан ашыу барған һуғыштар барышында немецтарҙың һәм уларҙың союздаштарының 1,5 миллион тирәһе һалдаты һәм офицеры сафтан сығарыла) Ҡыҙыл Армияның Юғары Баш Командованиеһы Көньяҡ-Көнбайыш һәм Көньяҡ фронттарҙағы көстәр менән немецтарҙың "Дон" армиялар төркөмөн тар-мар итергә ҡарар итә. СССР өсөн стратегик әһәмиәтле Донбасс ерен дошмандан азат итеү бурысы көнүҙәк проблемаға әйләнә. Үҙ сиратында, Германияның ҡорал һәм боеприпастар министры һәм ташкүмер әҙерләү буйынса империя уполномоченныйы махсус кәңәшмәлә Гитлерға Донбастан башҡа Германияның хәрби иҡтисадын юғары кимәлгә еткереп булмаясағы хаҡында белдерә. Гитлер үҙ командованиеһына Донец бассейнын ҡалдырмаҫҡа бойора. Ҡышҡы ауыр шарттарға ҡарамаҫтан, һуғыш хәрәкәттәре ҡыҙа бара.

8-се атлы корпус (112-се Башҡорт атлы дивизияһы уның составына инә) ғинуарҙың икенсе яртыһында Северский Донец йылғаһы буйында ҙур тимер юлы үҙеге булған Аҡ (Белая) Калитва станцияһы йүнәлешендә һөжүм башлай. Ошо алыштар хаҡындағы бер документта ошондай мәғлүмәт теркәлгән: "... 1943 йылдың 16 ғинуарында киске сәғәт 8-ҙә йыйылма отряд Үрге Попов утарын дошмандан азат итте. Аҡ Калитва йүнәлешендә алыштар бара, яңғын билдәләре күренә. 1943 йылдың 17 ғинуарында йыйылма отряд 101-се артминомет дивизионы ярҙамында Усть-Белокалитвенскийҙың (Аҡ Калитва) көнсығыш ситенә табан һөжүм башланы... 43 йылдың 18 ғинуарында дошман үҙенең артиллерия һәм миномет батареялары менән көслө ҡаршылыҡ күрһәтеүен дауам итте, 43 йылдың 19 ғинуарында көндөҙгө сәғәт 3-тә отряд Аҡ Калитва ҡалаһынан 2 саҡрымда Калитва йылғаһы бөгөлөнә сыҡты. 19 ғинуарҙа дивизия штабында полковник Г.Фондеранцевтан донесение алынды: "23 сәғәттә Аҡ Калитваның көнсығыш яғы азат ителде. Подразделениеларҙы тәртипкә килтерәбеҙ, ҡаланың төньяҡ-көнбайыш өлөшөндә оборона тотабыҙ".

Донесение менән танышҡас, генерал-майор Шайморатов йыйылма отряд алдында яңы бурыс ҡуя: Северский Донецтың көнбайыш ярында плацдарм алырға. 19 ғинуарҙа төнгә ҡарай 112-се атлы дивизияның берләштерелгән көстәре (йыйылма отряд), Аҡ Калитваны төньяҡтан һәм көньяҡтан урап үтеп, ҡалаға инә. Дошман, ҙур юғалтыуҙарға осрап, Северский Донецтың уң ярына сигенә. Йыйылма отряд Северский Донецтың көнсығыш ярында оборонаға күсеп, Сабуров, Вязовка, Иҫке Станица, Лопуховатый тораҡ пункттары рубежында нығына.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*✓ Был тамбурлы сигеүле кейемдәрҙән ни өсөндөр беҙҙең башҡорттар баш тартҡан һәм уларҙы башы-тояғы менән татарҙарға, мариҙарға һәм сыуаштарға биреп ҡуйған ине. Йәнәһе, сигеүле күлдәк-алъяпҡыстар икән - улар беҙҙеке түгел.*

# МИЛЛИ КЕЙЕМ

## ул асылыңды таныу,

**Бөгөн башҡорт йәмғиәтендәге оҫталарҙы, һәләтле, үҫенсәлекле кешеләр ижадын интернет аша ла күҙәтә алабыҙ. Йәғни, улар менән күрешеү форсаты булмағанда ла, интернет был мөмкинлекте бирә. Был мөмкинлекте файҙаланып, "Тамға" ижади берекмәһе хеҙмәтен, кәсептәрен һәм уның етәксеһе Зөлфиә КРАСНОВАның үҙен дә күптәр күҙәтәлер, хатта уларҙың тауары менән ҡулланалыр. Башҡорт милли кейемдәре, биҙәүестәре һәм сувенирҙары етештереүсе, яһаусы берекмәнең интернет селтәрҙәрендә киң билдәле булған төркөмө бар - ул "Тамға".**

**Зөлфиә Рәшит ҡыҙы, һеҙ ҡасандан бындай "Тамға"лы булып киттегеҙ? Ҡайҙан, кемдән тыуған идея булды? Ниндәй маҡсаттар менән башланды эштәр?**

- Һөнәрем буйынса мин инженер-төҙөүсе, төҙөлөш институтын тамамланым һәм ғүмер буйына ошо өлкәлә эшләнем. Бөтөн хеҙмәтем күсемһеҙ милек, маркетинг кеүек етди өлкәләр менән бәйле булды. Һәм ҡырҡ-ҡырҡ биштәр тирәһендә башыма: "Шулай уҡ та был тормошом ошолай күңелһеҙ һәм буш үтерме икән?" - тигән төшөнкө уйҙар килә башланы. Мин йәшәйештә күҙәттем һәм үҙемә, яуаплы эш кенә түгел, ә ижади эшмәкәрлек тә кәрәк икәнен аңларлыҡ дәрәжәгә еттем.

Һәм баш вата башланым инде: нимә менән шөғөлләнергә? Был тәңгәлдә мине һәр саҡ шундай үҙенсәлек тарта ине: шөғөл тап рухи ҡиммәттәремә бәйле һәм йәнемә шифа бирерлек булырға тейеш. Һәм мин һатыуҙа башҡорт сувенирҙары, биҙәүестәре юҡлығына иғтибар иттем. Бынан 7-8 йылдар элек улар ысынлап та юҡ кимәлендә ине бит. Ошо фекерҙә туҡталғас та әле шәхси теләктәремде, ихтыяжымды ҡәнәғәтләндергәнен эҙләнем: ул сувенирҙар нисек, балсыҡтанмы, ағастанмы, тауарҙанмы булырға тейеш? Был һорауыма яуап табыр өсөн өс йыллап тик күргәҙмәләр, кәсепселәр йәрминкәләре буйлап ҡына йөрөнөм. Ысынында, мәғлүмәттәрҙән баш әйләнеп китте. Тәҡдим ителгән тауарҙар һатыуға "башҡорттоҡо" тип сығарыла, әммә уларҙың күбеһененең бер ниндәй ҙә раҫлаусы дәлилдәре юҡ ине. Етештереүселәр был өлкәне өйрәнмәй эшкә тотонған һәм үҙенсәлекте аңлата ла алмайҙар.

Ошондай эҙләнеүҙәр, уйланыуҙарҙан һуң мин, ниндәй уҡыу йорттарында әлеге белемде алып була икән, тип белешә башланым һәм Өфө дәүләт иҡтисад һәм сервис университетының магистратура программаһына уҡырға индем. Һыҙыҡ өҫтөнә алам - көндөҙгө бүлектә уҡыным. Шунда минең быға тиклем үҙем белмәгән, хатта уйламаған да яҡтарым, һәләттәрем асылды. Бигерәк тә дизайн, иҡтисад, компьютер программалауҙары буйынса.

Минең фәнни етәксем сәнғәт фәндәре докторы Альмира Ғәйнулла ҡыҙы Йәнбухтина донъяла беренселәрҙән булып халыҡ ижадын сәнғәт дәрәжәһенә күтәреп өйрәнеү кимәленә өлгәшкән кеше. Уның хеҙмәттәре күп. Мин уның иң һуңғы уҡыусыһы булдым һәм, үкенескә ҡаршы, ғалимә бөгөн беҙҙең арала юҡ инде. Уның шундай алтын һүҙҙәре булды һәм мин уны үҙемә девиз итеп алғанмын: "Халыҡ ижады ҡыуаныслы һәм кәйеф уята торған, ихласлыҡ, матурлыҡ яһай торған өлкә булырға тейеш", - тип ҡабатларға яратты. Шуға ла мин эшемдә ошо кәңәште тотам: ижад иткәндәрем ҡулға ла, тәнгә лә рәхәтлек бирһен һәм күңелгә лә хуш килһен.

**Ни өсөн тап төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының милли кейемдәрен һайланығыҙ? Үҙегеҙҙең тыуған яҡ булған өсөн генәме?**

- Башҡорт кейемдәрен фәнни рәүештә өйрәнеү барышында тап төньяҡ-көнбайыш башҡорттары кейемдәрен тергеҙеү, тегеү теләге уянды. Ни өсөн тап уларҙыҡынмы? Сөнки был тамбурлы сигеүле кейемдәрҙән ни өсөндөр беҙҙең башҡорттар баш тартҡан һәм уларҙы башы-тояғы менән татарҙарға, мариҙарға һәм сыуаштарға биреп ҡуйған ине. Йәнәһе, сигеүле күлдәк-алъяпҡыстар икән - улар беҙҙеке түгел. Һәм быға тиклем башҡорт кейемен өйрәнгән ғалимдар ҙа был территорияға артыҡ инә һалып бармаған. Улар был кейем төрө татар-сыуаш-мариҙарҙыҡы менән буталып бөткән һәм инде айырымланыр мөмкинлеге юҡтыр, тип иҫәпләгән. Бик ныҡ хаталанғандар!

**Сигелгән кейемдәр - улар бик сағыу. Бында төҫтәрҙең ниндәйҙәрен дә ҡулланырға буламы, әллә айырым төҫтәр тәртибе бармы?**

- Башҡорт кейемдәрендә иң төп төҫтәр бишәү. Уларҙың һәр береһененең үҙ тәғәйенләнеше, алып килгән мәғлүмәте һәм эстәлеге бар. Мәҫәлән, ҡара төҫ - ул ер. Ул шулай уҡ йәшәүҙең мәңгелек түгелләген, беҙҙе икенсе донъя - ер аҫты донъяһы көтөүен дә һәм ерҙәге бар тереклектең тупраҡтан бар булып, тупраҡҡа әйләнеп ҡайтырын да аңғартып тора. Зәңгәр төҫ - асман төҫө, унда күк йөҙөндәге бөтөн төрлө серҙәр, йондоҙҙар, ҡоштар һәм башҡалар сағылыш таба ала. Ҡыҙыл, һары, йәшелдең дә үҙ тәғәйенләнеше бар, бер төҫ тә матурлыҡ өсөн генә ҡулланылмай.

Ә инде башҡорт халҡындағы милли кейем төрҙәренә килгәндә, бында ла "был беҙҙеке, был беҙҙеке түгел" тигән менән бик һаҡ булырға кәрәк. Әле китаптарға таянып, төп ете төрлө кейем һайланып күрһәтелһә лә, ысынында улар бик күп һәм төрлө-төрлө. Ҡырҡтан ашыу башҡорт ырыуында ҡырҡтан ашыу кейем үҙенсәлеге бар һәм һәр ырыу эсендә лә улар әллә нисә төргә таралып китә.

Мин, мәҫәлән, төньяҡ-көнбайыш башҡорттары кейемен өйрәндем һәм шуларҙы тергеҙәм. Диссертациямдың темаһы ла ошо төньяҡ-көнбайыш башҡорттары кейемен асыҡлау, табыу һәм ҡулланылышҡа ҡайтарыуға ҡоролған. Туймазы һәм Шаран райондары буйынса ентекле эш алып барам әле. Күптәр "Ул яҡтарҙа ниндәй башҡорт кейеме һаҡланһын?" тип тә ебәрә. Ә һаҡланған! Ниндәйерәктәре әле!

**Һәр ырыуҙың үҙ кейем үҙенсәләге бар, тинегеҙ. Ә бына ул үҙенсәлектәр йәшәгән урын, климат шарттарына ҡарап та айырыламы?**

- Эйе, кейемдәрҙең яһалыуына һәм биҙәлешенә бер нисә фактор йоғонто яһай. Иң беренсе - климат. Унан тарихи формат, унан йәшәгән урында сит милләттәрҙең булыу-булмауы. Әйтәйек, бына бөрйән ырыуы кейемдәре - улар башлыса йылы тауарҙан тегелә, сөнки ул яҡ тау-урмандар, ҡалын ҡарлы ҡыштар яғы. Бында күп кейемдәр тиренән тегелгән, тире менән биҙәлгән һәм башҡалар. Ул яҡта йышыраҡ һунарсылыҡҡа, малсылыҡҡа, һыбай йөрөүгә ҡулайлашҡан кейемдәр кейелгән. Мәҫәлән, еңдәр терһәктән тарая - ел инмәһен өсөн, итәктәр, ыштандар киң - атта уңайлы булһын өсөн, кейемдәр бер нисә ҡатламдан тора - йылылыҡ өсөн.

Ә мин йәшәгән Туймазы яҡтарында климат күпкә йылыраҡ, шунлыҡтан, кейем туҡымалары ла еңелерәк һәм йоҡараҡ, сөнки кәсеп тә башҡараҡ булған: ер эшкәртеү, игенселек, баҡсасылыҡ. Туҡыма әҙерләү өсөн дә кесерткән, киндер һәм торараҡ етен үҫтерә башлағандар. 18-19-сы быуаттарҙа башлыса шундай үҫемлектәрҙән тауар туҡыу алға киткән. Тауар үҫемлек һабағының файҙаланыла торған өлөшө киңлегендә, йәғни 38-40 см тирәһе булып килеп сыҡҡан. Шунлыҡтан, был яҡтың күлдәк конструкцияһы ла ошо киңлектәге материал үлсәменә ярашлы итеп тегелгән. Мәҫәлән, итәктәр алтышар киң булмаған туранан һалынған, өҫкө яҡ та шундай уҡ тураларҙан (дүртмөйөштәрҙән, трапецияларҙан) ҡоршалған. Хатта ҡултыҡ аҫты ла,ең дә шундай уҡ өлөштәрҙән ултыртылған. Был өлөштәрҙе туҙғанда алмаштырып та булған. Һәм ошо дүрткелдәр эсендә фигуралы сигеү өлгөләре ултыртылған. Һәр өлгө эсендә нисәләр орнамент булырға тейеш булған. Был өлгөнөң үлсәменә һәм кейем эйәһенең хәленә ҡараған. Күлдәк өҫтөнә иҙеү, һырға һалынған. Был биҙәүестәр һаҡал, селтәрҙәргә ҡарағанда күпкә еңелерәк, йәғни, климатҡа ҡарап эшләнгән булған.

Шунлыҡтан, тәңкәле биҙәүестәр башҡорттоҡо ла, таҡыялар, кәләпүштәр, сигеүле күлдәктәр, йоҡа иҙеүҙәр ситтеке тип әйтеү төптө хата. Эйе, төньяҡ-көнбайыш башҡорттары мариҙар, сыуаштар, татарҙар менән яҡындан аралашып йәшәй һәм уларҙың кейем биҙәктәрендә, фасондарында оҡшашлыҡ булыуына ла аптырарға түгел. Әммә улар бер иш түгел. Беҙ музей экспонаттары, ауылдар, ғаиләләр, тәғәйен фамилиялар менән эшләйбеҙ. Һәр өлгөнөң үҙ сығышы бар. Татарҙар суҡындырыуҙан ҡасып, күпләп беҙҙең ерҙәргә килеп ултырған, башҡорттар араһында йәшенеп, һаҡланып ҡалған. Һәм, әлбиттә, быуаттар буйына уларҙың кейем өлгөләре беҙҙекенә, беҙҙеке уларҙыҡына үтеп ингән. Тик мин тергеҙгән кейемдәр улар шәжәрәһе буйынса тап "башҡорт" тип теркәлгән ғаиләләрҙән алынған. Беҙ шулай тик тарихи факттар, документтар, ныҡлы сығанаҡтар нигеҙендә генә эш итәбеҙ.

**Тамбур сигеүе менән һеҙҙең машина сигеүен сағыштырып, айырмалыҡтарын ҡарап, тикшереп үтһәк…**

- Тамбур сигеүе - ул боронғораҡ ваҡыттыҡы һәм ул ҡул







✓ ***Осһоҙ хаҡҡа алып киленгән ҡырғыҙ-ҡаҙаҡ күлдәктәре башҡорт күлдәге итеп һатыуға сығарыла. Ә бит ул фасондар бөтөнләй икенсе климат кейемдәре, уларҙың тауары ла, тегелеше лә шул яҡҡа хас булғанса.***

# КЕЙЕҮ -

## үҙаңдың үҫеше билдәһе

эше. Тамбур сигеүе күберәк өй туҡымаһына тура килә. Уны көнкүреш кейеменә артыҡ сикмәгәндәр, бары тик ҡәҙерле байрам кейемдәрен генә биҙәгәндәр. Йортта ла ул бирнә, бүләк һымаҡ затлы әйберҙәргә һалынған. Яҫтыҡ тыштары, ҡорғандар, урын ябыуҙары һымаҡ күҙгә күренеп торған әйберҙәрҙә булған ул сигеүҙәр. Ә әлеге беҙ тәҡдим иткән сәнғәт өлгөһө - һынлы сигеү. Ул тамбур һымаҡ иркен, киң итеп түгел, ә тултырып сигелә. Һынлы сигеү һуңғы быуаттарға, теген машинкалары килеп сыҡҡан замандарға ҡайтып ҡала.

**Ә бына төрлө милләттәрҙәге биҙәктәр, тамғалар уртаҡлығын нисек аңлатаһығыҙ?**

- Кейем биҙәктәре, символдар, тамғалар - улар һәр милләттеке, һәр ырыуҙыҡы тип айырым билдәләнһә лә, күп халыҡтарҙың уртаҡлығы булған ер, күк, ҡояш, өс донъя бүленеше кеүек дөйөм төшөнсәләр, фәлсәфәләр хас уларға. Беҙ барыбыҙ бер кешелек вәкилдәре бит, бигерәк тә төрки халыҡтарҙа оҡшашлыҡ күп. Һәм, әйтергә кәрәк, сигеү өлгөләре көнкүреш кимәлендә барлыҡҡа килгән сәнғәт өлгөһө. Бында кеше факторҙары, тойғолар, хистәр өҫтөнлөк иткән. Мәҫәлән, башҡорт ҡатыны күлдәгендәге биҙәлеш күрше ауылдағы сыуаш ҡатынының ла оҡшарға мөмкин, сөнки бер-береһенән өйрәнеү тигән нәмә лә булған бит. Йәки татар сигеү өлгөләре башҡорт ауылына бүләк, бирнә булып килгән. Ҡоҙалашыу, ғаилә ҡороуҙарҙан да уртаҡлыҡ килеп тыуған. Ошоларҙы ла оноторға ярамай. Тик өйрәнелгән, ситтән алынған өлгөнө ул үҙенсә итеп һалған. Тура ғына күсереү булмаған. Быларҙы айырып була. Бына сыуаштарҙа, мордваларҙа биҙәктәр бик тығыҙ, өҫтө-өҫтөнә сигелә. Татарҙарҙа улар үтә сағыу һәм биҙәктәр вағыраҡ. Башҡорттарҙағы нағыштарҙа боронғо тамғалар урын алыңҡырай. Хатта сәскәләр араһында ла боролоп китеүҙәр төрлө архаик фигураларға тартым. Биҙәктәр ҙә иркен, киң булып ята. Быларҙы ошо өлкәне өйрәнгән күҙ шунда уҡ айыра. Ә инде килеп тыуған бәхәстәр, талаш-тартыштар, "һеҙҙеке-беҙҙеке" тип бүлешә алмауҙар - улар белемһеҙлек билдәһе йәки төплө өйрәнмәйенсә, тикшермәйенсә ҡулланылған, тегелгән, сигелгән әйберҙәр. Шуға ла беҙ бөгөн кейемдәрҙе тикшереп, сығышын, тарихын белеп етештереү яҡлы.

**Баш кейемдәрендә ниндәй айырмалыҡтар бар? Белеүебеҙсә, төньяҡ-көнбайыш башҡорттары ырыуҙарында күберәк еңел баш кейеме урын ала...**

- Беҙҙең яҡта тәңкәле биҙәүестәр аҙ һәм тәңкә-мәрйенле ҡашмау һымаҡ баш кейемдәре лә юҡ иҫәбендә. Күберәк яулыҡтар, уҡалы төрлө таҡыялар, ҡалфаҡтар өҫтөнән ябына торған япмалар, һарауыстар, таҫтарҙар булған. Француз, нимес (немец) яулыҡтары киң билдәле был яҡтарҙа. Француз яулығы ҡыҙыл биҙәкле булһа, ниместеке аҡ төҫтә булған.

Француз яулығының тарихын да беләһегеҙҙер: француз яуынан ҡайтып барған башҡорт ғәскәре юлда ғәрәп сауҙагәрҙәренең каруанын осрата ла, сауҙагәрҙәр ҡурҡып, тауарҙарын ҡалдырып ҡаса. Ә ҙур каруанда төк-төк булып әлеге француз яулығының тауары тейәлгән була. Ғәскәр ир-егеттәре рәхәтләнеп был табышты бүлешеп ала ла, алып ҡайтып, ҡатын-ҡыҙына бүләк итә. Һәм әллә күпме ғәскәрҙең бер төрлө яулыҡлыҡ материал алып ҡайтыуы шул "француз яулыҡ" атамаһын килтереп сығара ла инде. "Нимес яулығы" менән дә ниндәйҙер тарих бар, униһын дөрөҫ кенә итеп бәйән итә белмәм, шуға һөйләмәй торам.

Ир-егеттәрҙең баш кейеме лә башҡа яҡтарҙыҡынан айырыла. Шулай уҡ еңел, уңайлы, климатҡа яраҡлаштырылған кейемдәр. Быларҙың барыһын да һеҙ интернеттағы "Тамға" төркөмө күргәҙмәләрендә таба алаһығыҙ.

**Кейемдәрҙәге, биҙәүестәрҙәге стилләштереүгә, заманлаштырыуға нисек ҡарайһығыҙ?**

- Стилләштереүҙе бик үк урынлы һәм дөрөҫ кенә тормошҡа ашырмайҙар беҙҙә. Кем нимә теләй, шуны эшләй. Осһоҙ хаҡҡа алып килентән ҡырғыҙ-ҡаҙаҡ күлдәктәре башҡорт күлдәге итеп һатыуға сығарыла. Ә бит ул фасондар бөтөнләй икенсе климат кейемдәре, уларҙың тауары ла, тегелеше лә шул яҡҡа хас булғанса. Ошоно аңламаған халыҡ шуларҙы башҡорт күлдәге итеп кейеп йөрөй. Күрәһегеҙ - камзулдар, кәзәкейҙәр, еләндәр ҡаҙаҡ нағыштары, тамғалары менән биҙәлгән, ә шуларҙы кейгән эйәләре быны аңламай ҙа хатта. Этно стилдәге алтай, бүрәт биҙәүестәре, беҙгә хас булмаған формаларҙағы, фигураларҙағы алҡалар киң таралып китте. Ҡытай тәңкәләренән йыйылған интернет биҙәктәрен башҡорт кейеме өҫтөнә һалыуҙары бигерәк күңелде ҡыра. Милли кейем матур һәм баһалы булырға тейеш. Стилләштереүгә тотонор алдынан кейемдәрҙең реконструкцияһын белеү фарыз, унан ғына был тәңгәлдә эшләргә батырсылыҡ итергә була. Заманлаштырыуға ҡаршы түгел мин, модалы әйберҙәрҙә милли биҙәлештәр булыуы бик ҡыҙыҡлы күренеш. Йәки милли кейемдәрҙең заман материалдарынан тегелеүе лә ҡыҙыҡ. Бары улар реаль булмышынан айырылып, бөтөнләй автор фантазияһы ғына булып ҡалмаһын ине. Йәки сит милләттәрҙекен үҙгәртеп үҙләштереү булмаһын ине.

Милли кейемдәрҙәге айырмалыҡтар, үҙенсәлектәр менән ныҡлы ҡыҙыҡһыныуыбыҙға Стратегик тикшеренеүҙәр институты иғтибар итте һәм беҙҙе төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының этнографик мираҫын өйрәнеү программаһына индерҙе. Хәҙер беҙ шул яҡ районлар буйынса йөрөп, музейҙарҙа эҙләнеп, ғаилә архивтарында соҡоноп, табыштарҙы видеоға, фотоға төшөрөп ҡуябыҙ. Был өлгөләрҙе сифатлы һүрәттә, баҙыҡ төҫтәрҙә һәм документаль белешмә менән интернетҡа ла сығарабыҙ. Артабан был кейем өлгөләрен дизайнерҙар, сәнғәт белгестәре күрһен һәм дөрөҫ форматта кейемдәр етештерһен ине, тигән теләктәбеҙ. Бына ошо эштәр әлеге стилләштереү мәсьәләһен дә яйлап яйға һалыр ул, тип ышанабыҙ.

**Бөгөн милли кейем тегеүкейеү, милли биҙәлештәр, биҙәүестәр ҡулланыу урынлымы ул? Был бер айырым төркөм шөғөлө генә түгелме?**

- Беҙ, мәҫәлән, был кәсеп нигеҙендә үҙебеҙҙең эшҡыуарлыҡты булдырғанбыҙ. Башта ысынлап та беҙҙең милли кейемдәргә һәм биҙәүестәргә мәҙәниәт өлкәһендәгеләр генә заказ яһай ине, бөгөн был күмәк ҡыҙыҡһыныуға әүерелде. Һәм эш әле ыңғай ағымда бара. Күпләп йәштәр заказ яһай, балалы йәш ғаиләләр күп мөрәжәғәт итә. Мәскәүҙән, Ҡаҙандан да заказдар килә, хатта икенсе ырыу вәкилдәре лә сигеүле кейемдәрҙе кейеп ҡарарға, заказ бирергә теләй. Һуңғы ваҡытта ҡатын-ҡыҙҙар ғына түгел, ир-егеттәр ҙә әүҙемләште һәм тиҙҙән милли байрамдар тик милли кейемдәрҙә генә үтә башлар, тигән ышанысыбыҙ ҙа бар әле.

Үҙ милләтеңдең, ырыуыңдың милли кейемен кейергә ынтылыу - ул үҙаңың үҫеше, асылыңды танып белеү, дөйөм бер массанан айырылырға ынтылыу билдәһе.

Нимәһе ҡыуаныслы: милли кейем етештереү кәсебе менән хәҙер йәштәр ҙә ҡыҙыҡһына. Беҙҙә, Мәҫәлән, минең улым Флорид Рәил улы Вәхитов - милли кейемдәр, милли орнаменттар, уҡа-таҫмалар буйынса дизайнер. Уның был ижадҡа, был кәсепкә йәштәрсә үҙ ҡарашы, идеялары бар.

Һуңғы йылдарҙа балаҫ һуғыу кәсебе менән дә ҡыҙыҡһынам. Беҙҙең яҡтың үҙенсәлеге шунда: балаҫтарҙа биҙәктәр ҡара ерлеккә төшөрөлә. Урал арьяғы районларында артыҡ сағыу булмаған тәбиғи төҫтәр буй-буй итеңкерәп һалынһа, был яҡта ҡараға сағыу ромб формаһындағы нағыштар ята.

Беҙ әле Туймазы мебель фабрикаһы менән килешеп, каркасһыҙ йыйылмалы мебель етештереү буйынса ла эш башланыҡ. Был мебелдәргә милли орнаменттар сигеп һалына һәм ул тирмәләрҙә, юлда, походта, йәйге йорттарҙа бик уңайлы файҙаланыла ала. Был мебелде кресло итеп тә, карауат итеп тә, пуфик формаһында ла ултыртып була. Милли биҙәлеше менән шундай матур фон да биргән был тауар һатыуҙа ихлас үтә.

**Зөлфиә Рәшит ҡыҙы, һеҙ әлеге шөғөлөгөҙгә, сағыштырма әйткәндә, һуң ғына килгән кеше. Тормоштарында нимәлер үҙгәртергә, яңы башланғыстарға тотонорға ҡыймай йөрөгәндәргә ниндәй кәңәштәр бирер инегеҙ?**

- Илле йәштә мин икенсе юғары белем алып, кандидатлыҡ диссертациямды тамамланым. Ошо йәштә генә ижади эш менән шөғөлләнә башланым. Тормошомдағы был боролош миңә икенсе һулыш бирҙе, ижад ҡомары, йәшәргә теләк уятты. Әллә ҡайҙан дәрт-дарман, идеялар, фантазиялар түгелеп-ташып барлыҡҡа килде. Ниәт ҡылып, тәүге аҙымдар яһалһа, мөмкинлектәр асыла ла китә икән ул. Йәнең теләгән, күңел көҫәгән шөғөл - ул ғүмерҙе оҙайтыусы, тормошҡа һөйөү уятыусы бер мөғжизәле көс. Ә инде был хеҙмәт һинең милләтеңә лә файҙа килтерә икән - икеләтә сауап һәм кинәнес.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**









**✓ *Әммә ләкин төшөнкөлөккә бирелеү тойолманы. Ошоно үтә күреп торған тәжрибәле майор иркен һуланы. Утлы ҡулсаға эләгеүҙәре хаҡында ул, уратып-суратып тормайынса, юрый тураһын әйтте, буғай.***





*Бөйөк Ватан һуғышынан ҡайта алмаған олатайым иҫтәлегенә.*

**Иҙрис НОҒОМАНОВ**

# МИН ХӘБӘРҺЕҘ ЮҒАЛМАНЫМ!

**Хикәйә**

Ил өҫтөнә ябырылған афәт ябай ауыл кешеһе Хәйриваранны ла урап үтмәне. Ажарланған ғәрәсәт ише ҡотолғоһоҙ ҡосағына ҡыҫып, башҡа миллионлаған яҙмыштар ыңғайына өйөрөлтөп-әйләндереп алды ла китте. Хәйер, нисек инде ул урап үтһен? Илдә йәшәгән һәр кем шул илдең киҫәксәһе лә. Бер бөтөн кисергән мәлдә киҫәксә ситтә ҡала аламы?

Ҡустыһы Ғилмитдин менән улар Өфөлә тап булыштылар. Байтаҡҡа алданыраҡ киткән туғаны Әлкәлә хәрби әҙерлек үтеп ята икән. Уйламағанда юлдары киҫешеүгә ҡыуанып бөтә алмаған ағай-эне, форсатын тура килтереп, фотоға төштө. Төшөүен төштөләр, ә ошо осрашыуҙары улар өсөн һуңғыһы икәнлеге баштарына ла инеп сыҡманы. Улар һуғышҡа китеп барһа ла үлер өсөн бармай ине бит...

Һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәгән, бер-береһенә ҡарап танһыҡтары ҡанмаған (әйтерһең дә, ун йыл күрешмәгәндәр!) Хәйривара менән Ғилмитдин ауылдың иң абруйлы, иң хөрмәтле кешеләре булдылар. Береһе, ҡустыһы - уҡытыусы, икенсеһе - ауыл советы сәркәтибе ине. Һуңғараҡ, эшкә сымыры, ипле, яңыса фекерләй белгәнен, йыйнаҡлығын күреп, ағай кешене район үҙәгенә саҡырып алдылар.

Нөғәмәнов ер эштәре менән шөғөлләнде. Эшмәкәрлеге ҡатмарлы осорға тура килһә лә, вазифаһына намыҫ менән ҡараны. Колхоздар менән совхоздарҙың яңы "тыуып" ятҡан сағы. Ул яҡтан да, был яҡтан да ҡыҫымға алыусылар күп булды: һәр кемгә яҡшыраҡ, ундырышлыраҡ ерҙәр кәрәк. Әле хәтерендә, бер мәл Мәскәүҙең тура үҙенә буйһонасаҡ "Заготскот" селтәрҙәре булдырыла башланы. Уның арыу ғына ҙур бер филиалы районда ла ойошторолдо. Яҡшы яҡтан үҙен күрһәтеп ҡалырға теләгәндер инде райкомдың беренсе секретары Хәйриваранны шунда уҡ "порукаға" алды. Ул "Заготскот" өсөн көтөүлек биләмәләрен ҡаралғандан күберәк бүлдереп, аҙыраҡ күрһәтергә самаланы һәм бөтөнләй икенсе, ҡара тупрағы боҫорап ятҡан урындан. Өлкән-өлкән түрәләр бит мәркәздең үҙенән килеп ҡараясаҡ.

Хәйривара тейешле ергә барғанда ысын-ысындан оло мәжлес ойошторолған ине. Гөжләп торған тәкәләр һуйылған, һәр төрлө эсемлеккә тулып ултыра. Торғаны һабантуй инде. Ундайҙы күп күргән тәжрибәле белгес шунда уҡ аңлап алды: тимәк, һатып алырға теләйҙәр. Һәм ул, йыйында туҡталып тормаҫтан ғына үҙ эштәрен бөтөрҙө лә, ҡайтты ла китте. Ерҙәр тәғәйен урындан һәм тейешенсә кимәлдә бүленде. Аҙаҡ, биләмәләр яңылыш үлсәнгән, тигән ялыу буйынса Өфөнән комиссия килеп йөрөнө, әммә Нөғәмәновтың эшендә бер хилафлыҡ та тапманылар. Әлеге осраҡтан һуң "беренсе" Хәйриварағa ҡырын-мырын ҡарап, теш ҡайрар булды. Мутлыҡтары өсөн урынынан осоп киткәнсе. Уның ҡарауы, ер белгесенең намыҫы таҙы ҡалды. Заманына күрә юғары ғына дәрәжә биләгән ғәҙел ир өҫтөнән шунда уҡ тағы ялған донос яҙыусыһы табылды - ил буйлап 1937 йыл атлай ине. Хәйривара ниндәйҙер мөғжизә менән үҙен-үҙе яҡлап ҡала алды. Шуның арҡаһында береһенән-береһе бәләкәй өс баланы атайһыҙ, ҡатыны Фәүзиәне ирһеҙ ҡалыуҙан ҡотҡарҙы. Әлеге шул аҡылы инде. Зиһене етеңкерәмәй, бер генә яңылыш һүҙ ысҡындырып, яҙа баҫтымы, башы Себергә китә ине. Ярай әле Себер менән генә ҡотола алһаң...

Ә һуңынан... Һуңынан, тормоштар шөйлә матурланып, донъя рәхәтлеген күрә башлағанда, бөтә өмөттәрҙе селпәрәмә килтереп, йәшәйештәрҙе баштүбән әйләндерә һуҡҡан тәреле яу ябырылды һәм аяуһыҙ ҡан ҡойош башланды.

Яман ҡырылышта береһенән-береһе ҡеүәтлерәк дәүләттәр менән дәүләттәр генә бәрелешеп ҡалманы, ҡитғаға ҡаршы ҡитға сыҡты. Ете йылға һуҙылған әлеге ҡапма-ҡаршы тороуҙың ниндәй эҙемтәләргә килтерәсәген әле бер кем дә әйтә алмай ине. Ә эҙемтәләр ҡот осҡос буласаҡ.

Ауылдаштарының байтағы һалдат шинеле кейергә өлгөрһә лә Яңауыл колхозының партком сәркәтибе итеп һайланған Хәйриваранны саҡыртыуҙы, ни сәбәптәндер, һуҙа килделәр. Һәм бына, ниһайәт, 1941 йылдың декабрь баштарында уға ла ҡағыҙ тоттorҙолар. Өйөнән сығып китеүгә өс көн тигәндә ул инде һуғыштың ҡайнап торған урынында ине. Ғәжәп, башҡаларҙың китеүен ауыр кисергән Хәйривара был юлы хатта иркен һулап ҡуйҙы. Юғиһә, ярты йыл эсендә тол ҡалырға өлгөргән йәп-йәш ҡатындар, һуғышта һәр төрлө ағзаларын ҡалдырып ҡайтҡан яугирҙар ҡырын-мырын ҡарай башлаған һымаҡ ине. Йәнәһе, ҙур түрә булғас ни, һуғышҡа ла бармай ята. Эй-й, был әҙәми зат! Үҙенән башҡаға саҡ ҡына ла һәйбәтерәк булмаһын - күрә алмай башлай. Заман-ҡоролошона күрә кешеләре лә шулай аҙамы икән әллә?

Шундай көнсөлдәрҙең береһе райсоветта эшләне. Эшләне тип, үҙенең ҡулынан йүнле бер эш килмәй, фекерләү яғы ла самалы ғына, ә белемсе булып ҡылана. Етмәгән аҡылын башҡаларға өйрәтеп маташа. Бына ошоноһо иң ҡурҡыныслыһы ине. Өҫтәүенә, ауыҙынан хәмер эсе өҙөлмәне. Ҡыҫынҡы ғына кабинетта бергә ултырғанғамы, мәңге йәпәтәйләнеп, баҫалҡы холоҡло Хәйривара тирәһендә уралыр ине. Бөтөн нәмәһен унан эшләтеп алыр ҙа, күрҙегеҙме ағайығыҙҙы, тигәндәй, күкрәк киреп йөрөй торғайны. Нисек итеп шул башһыҙ әҙәм райсовет һынлы райсоветҡа барып оя тибә алды икән? Ошо һорауҙы Хәйривара үҙ-үҙенә йыш ҡына бирер булды. Барыһы ла асыҡланғанға тиклем.

Хәйер, ул бәндә власть органдарына нисек килеп ингән, шул рәүешле еңел генә осоп та китте. Әлеге шул аңралығы сәбәпсе инде. Өфөнән килһә лә, ябай ғына кейемле оло вәкилде коридорҙа әселе-сөсөлө һүҙҙәр менән һүгеп ташлаған. Танымайса. Мәңге иҫерек булғас ни. Ауыл кешеһе, тип уйлаған, күрәһең. Ауылдан килгәндәр менән һәр саҡ шулай ҡылана торғайны. Аҙаҡ: "Кем икәнлеген аңғартһаң була инде",- тип Хәйриварағa үпкә белдереп йөрөнө. Әйтерһең дә, вәкил килгәндә ул уның еңенән тартып торорға тейеш булған. Ҡыҙыҡ кешеләр була бит. Ҡыҙығын-ҡыҙыҡ, Хәйривара һиҙемләне, теге уҫал ниәт менән яҙылған шикәйәт тә көндө уның эше булды. Ит изгелек, көт яуызлыҡ. Шулай ҙа һуңынан белде: сәрхүш әҙәм райсовет башлығының бажаһы икән, ҡәһәрең. Бер туған. Бына шулай, йәмәғәт эшенә зыян килһә-килһен, тик бажа нужа күрмәһен...

- Старшина Нугаманов! - Баянан бирле батальон атужаһын рәтләп булашҡан Хәйриваранның ауыр уйҙарын талапсан тауыш бүлдерҙе. Комбат икән.

- Я, товарищ майор!

- Старшина, обоздар кискелеккә әҙер булырға тейеш. Эңер төшөү менән ҡуҙғалабыҙ. Яҡты күҙҙә өлгөрөп ҡалығыҙ.

- Так точно, өлгөрәбеҙ! Йөктәр инде тейәлеп бөткән тиерлек.

- Яҡшы, һәр ваҡыттағыса һынатмаҫһығыҙ тип ышанам.

Төптән ныҡ, яурынтаҡ, саф башҡорт ҡиәфәтле, осҡор ҡарашлы батальон старшинаһы Нөғәмәнов йәшкә үҙенән күпкә кесерәк командирының йылы мөнәсәбәтенән ҡәнәғәт ҡалды. Уларҙың ҡаты бәрелештәрҙә шаҡтай ҡаҡшаған хәрби часы Тула ҡалаһы янында тора. Бер ынтылыуҙа ярты Европаны бағындырған кеүек, СССР ерҙәрен дә анһат ҡына ҡулға төшөрмәксе булып ымһынған фашист илбаҫарҙары хәҙер, саҫҡау һыуыҡтар өтә башлағас, яҡшы аңлай: йә беҙ советтарҙы, йә улар беҙҙе. Өсөнсөһө бирелмәгән. Шуның өсөн дә йәнтән аямай алға - Мәскәүгә ынтыла. Советтарҙың баш ҡалаһы ана ғына, күренеп тора, ә ниндәйҙер бер Тула уларҙың юлында тамаҡҡа арҡыры торған һөйәк ише. Маңлайға-маңлай күпме тапҡыр һөжүм итеп ҡараһалар ҙа, ала алманылар. Әле бына һуңғы көндә генә, нисектер, тыныслана төшкән һымаҡтар. Әллә төңөлә барыуҙары шулмы? Бәлки, берәй этлек уйлайҙарҙыр әле. Һәр төрлө этлеккә немецтың башы эшләп тора бит.

Ҡасандан көтөлгән контрһөжүмдәре һаман башланмай ҙа башланмай. Мәскәү һынлы Мәскәүҙе ҡалдырырға йыйынмайҙарҙыр бит инде. 1812 йылда, ярай, ғәскәрҙе һаҡлап ҡалыу хаҡына баш ҡаланы биреп ҡотолғандар. Заман башҡа, заң башҡа, хәҙер бит заманалар икенсе. Бөтөнләй икенсе. Гитлер һиңә Наполеон түгел, Мәскәүҙе бер ҡулға төшөрһәме...

* * *

Көн үҙәге ауышҡанда борсолоуы ҡаҡса йөҙөнә сыҡҡан комбат ҡулы аҫтындағы командирҙарҙы блиндажына йыйҙы.

- Иптәштәр! - Эске хәүефтән тоноҡлана төшкән баҫалҡы тауыш менән һүҙ башланы, - иптәштәр, әҙер булығыҙ, һеҙгә үтә лә яман хәбәр еткерергә мәжбүрмен: беҙ ҡамауҙа ҡалғанбыҙ. Оборона тотҡан арала немецтар беҙҙе ике яҡлап урап үткән. Күршеләр, тимәк, сыҙамаған.

Йыйылыусылар бер-береһенә ҡарашып ҡуйҙы. Ҡараштарҙа аптырау ҡатыш көҙөк, хатта бер аҙ ҡурҡа төшөү ғәләмәте лә сағыла ине. Әммә ләкин төшөнкөлөккә бирелеү тойолманы. Ошоно үтә күреп торған тәжрибәле майор иркен һуланы. Утлы ҡулсаға эләгеүҙәре хаҡында ул, уратып-суратып тормайынса, юрый тураһын әйтте, буғай. Һынап ҡарамаҡҡа. Хәҙер белде: командирҙары һынатмаясаҡ. Улар өсөн күңеле тыныс. Юғалып ҡалмаған командирҙың яугирҙары ла һынатмаҫ.

- Мин әле генә ҡәтғи фарман алдым, - комбат һүҙен дауам итте, - ул фарман буйынса беҙ, данлыҡлы Ҡыҙыл Армия боецтары, бер нимәгә ҡарамайынса ҡамау ҡулсаһын өҙөп сығырға тейешбеҙ. Бөгөн үк! Иртәгә һуң буласаҡ. Һорауҙар?

- Иптәш комбат, рөхсәтме?- Таушалған бушлатын рәтләй-рәтләй аяғүрә баҫҡан Нөғәмәновтың йөҙө хәстәрле ине, - ә обоздар менән нисек итербеҙ? Юлһыҙ ерҙә машиналар үтә алмаясаҡ.

- Үтә алғансы барырбыҙ.

- Ә артабан?

- Старшина, көнэлгәре паникаға бирелмәй торайыҡ, мәле еткәс күҙ күрер. Тағы һорауҙар булырмы? Башҡаса һорауҙар юҡ, - батальон командиры бер аҙ һынап торғандан һуң тағы һүҙ башланы. Был юлы уның тауышы тантаналы ишетелде:

- Бөркөттәрем минең! Һеҙҙең менән миңә утты ла, һыуҙы ла кисергә тура килде, әжәл күҙенә ҡарап торған мәлдәр аҙ булманы. Шөкөр, һынатманығыҙ. Был яғына ла шулай булыр тип уйлайым. Уйлайым ғынамы - ышанам. Ошоғаса теләһә ниндәй ауырлыҡтар алдында ҡаушап ҡалманығыҙ. Үҙегеҙҙе хас совет һалдатынса тоттоғоҙ. Әммә хәл ҡырҡыулаша. Иманым камил, алда торғандар янында үткәндәр сүп һымаҡ ҡына булып тойоласаҡ. Мин быны һеҙҙе ҡурҡытыр өсөн әйтмәйем. Ҡамауҙа ҡалыу - уйын эш түгел. Бында йә йырып сығаһың, йә...

Комбаттың, мәле еткәс, тигәне үҙен оҙаҡ көттөрмәне. Боеприпас тейәлгән өс, тыңҡыслап аҙыҡ-түлек тултырылған ике машина тын ҡарҙы йырып, алыҫ бара алманы. Ярты саҡрым ер үттеләрмеюҡмы, бүҫкәләренән көртҡә сумдылар ҙа ҡатып ҡалдылар. Ни алға, ни артҡа. Әйтерһең дә, элек-электән ошонда торғандар. Уларҙы хәҙер урындарынан ҡуҙғатыу тураһында һүҙ ҙә булыуы мөмкин түгел ине. Ныҡлап һеңделәр.

- Обоздарҙы яндырырға-а! - Командирҙың ошо фарманы хөкөм ҡарары кеүегерәк яңғыраны. - Артабан үҙебеҙ генә китәбеҙ.

- Иптәш майор, яраған эш булырмы? Обоздарҙы әйтәм, -

✓ *Аҫалы балаҫ борон-борондан матурлыҡ һәм байлыҡ, уңғанлыҡ һәм мәҙәнилек күрһәткесе булған. Һарыҡ йәки кәзә йөнөн иләп, буяп, билдәле бер орнамент, геометрик фигура менән аҫалап һуғылған балаҫ "аҫалы балаҫ" тип атала.*

Нөғәмәнов шунда уҡ тегенең ҡаршыһына килеп баҫты.

- Башҡаса нимә тәҡдим итә алаһың, старшина?

- Шул көйө ҡалдырып киткәндә. Урын төпкөл, урман ҡараңғы. Немецтәр, бәлки бында килеп тә сыҡмаҫтар.

- Мин һине аңлайым, Нугаманов, - полковник ауыр көрһөндө, - старшина буларaҡ, мөлкәт өсөн борсолаһың, сөнки һин яуаплыһың. Үҙемдең дә йән әсей: һалдатҡа ашау наҡыҫ, боеприпас етешмәгәндә күпме дәүләт харап була. Әммә ниндәй хәлдә ҡалғанлығыҙҙы күреп тораһың. Шуның өсөн мин һине әлеге яуаплылыҡтан азат ҡылам. Һине бер кем дә хөкөм итмәҫ.

- Шулай ҙа...

- Был - приказ, старшина! Һин бит хәрби кеше.

- Әлбиттә, армияла приказ менән көлләнән дә эшләтергә була. Бигерәк тә бөгөнгө кеүек хәрби осорҙа, - Хәйривара, эстән ярһып барһа ла, тыштан тыныс булырға тырышты, - ләкин, иптәш майор, быныуындай мөлкәт өсөн баштан һыйпамаҫтар. Унан, кешелеклелек тигән нәмә лә бар бит әле.

Батальон командиры ошо урында уйға ҡалды. Шунан:

- Конкретно нимә тәҡдим итәһең һуң, старшина, - тип ныҡыш һалдаттың арҡаһынан ҡаҡты.

- Мине обоздар янында ҡалдырығыҙ, - булды яуап.

- Һин үҙ аҡылыңдамы, Нугаманов?

- Так точно, иптәш комбат! Үҙ аҡылымда һәм барыһын да үҙ ихтыярым менән эшләйем.

Аптырай төшкән майор, был ысынлап әйтәме, әллә герой булып ҡылана ғынамы, тигән кеүек Хәйриваранып ут сәскән йөшкелт күҙҙәренә төбәлде. Ул күҙҙәрҙә яһалма геройлыҡтың тамсыһы ла юҡ ине. Барыһы ла ихлас күңелдән һәм ысын йөрәктән! Ә ҡараш! Ҡараш һуң ниндәй! Бөркөт ҡарашлы тип, әлбиттә, ошондайҙарға әйтәләр. Бындай ҡараш хужаһын бер ниндәй приказ менән дә, өгөт менән дә һындырып булмаясаҡ , комбат, әле килеп, ошоно аңланы.

Старшина ҡәтғи ҡаршы булһа ла, батальон командиры уның менән тағы ике һалдатты ҡалдырырға ҡарар ҡылды. Ғәҙәти булмағанса, һалдаттарҙы Хәйриваранын үҙенә һайлап алырға рөхсәт ителде. Ләкин ул һайлап торманы, теләктәре булғандарҙы үҙ иркенә ҡуйҙы. Ҡалыусылар ун туғыҙ йәшлек сая башҡорт егеттәре Лоҡман менән Солтан ине.

- Яҙмышты һынама, Нугаманов, машиналарға алдан уҡ шартлатҡыстар ҡуйығыҙ. Барыһына ла. Ишетәһеңме? Бәрелешкә инергә артыҡ тырышып тормағыҙ, был - мәғәнәһеҙлек. Дошман күренеп ҡалыу менән обоздарҙы... Хәйер, һиңә өйрәтәһе түгел, үҙең беләһең...

- Есть шартлатҡыстар ҡуйырға! - Старшина Нөғәмәнов майорға башлағанын әйтеп бөтөрөргә ирек бирмәне.

**(Дауамы бар).**

ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ

# БАЛАҪ ТА ҺУҒА...



**Балаҫ һуғыу - башҡорт халҡының боронғо һөнәрҙәренең береһе. Һарыҡ йөнө, кәзә мамығы һәм ҡылы, дөйә йөнө, ат ҡойроғо, шулай уҡ киндер менән кесерткән - һәр төрлө еп итеп эшкәртерлек тәбиғи материал ҡулланылған был кәсепте атҡарғанда. *Иләнгән ептәр ябай ғына һуғыу станогы ярҙамында аҫалы балаҫ, буй балаҫ, сепрәк балаҫ, турпыша, кейеҙ, септә, япма, сергетыш булып йорт ҡаралдыһына әйләнгән.***

Ҡулдан һуғылған йөн балаҫтарҙың затлыһы һәм ҡатмарлыһы - аҫалы балаҫ борон-борондан матурлыҡ һәм байлыҡ, уңғанлыҡ һәм мәҙәнилек күрһәткесе булған. Һарыҡ йәки кәзә йөнөн иләп, буяп, билдәле бер орнамент, геометрик фигура менән аҫалап һуғылған балаҫ "аҫалы балаҫ" тип атала. "Аҫа" һүҙенең мәғәнәһе, бер яҡтан, балаҫ һуғыу ысулын аңлата, аҫалап, биҙәк һалып, ептәрҙе асалапайырып, арҡыры йөн ептәрҙе үткәреп һуғыу менән бәйле кәсепте халыҡта "балаҫ аҫалау, аҫалап һуғыу" тип һөйләйҙәр. "Аҫа" һүҙе балаҫҡа ҡуйылған, йәғни һуғылған орнаментты, биҙәкте лә белдерә. "Биҙәк һалыу" мәғәнәһендә "аҫалау", "барсалау" тигән һүҙҙәр ҡул эше оҫталары телмәрендә йыш осрай. Шундай оҫталарҙың береһе - Сажидә Наил ҡыҙы Муллағолова менән таныштырабыҙ. Ул мәғариф өлкәһенә 39 йыл ғүмерен биргән, "Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы" исеменә лайыҡ булған алдынғы ҡарашлы, тынғыһыҙ, гел алға әйҙәүсе башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы. Әлеге көндә Өфөнөң 159-сы мәктәбендә башланғыс кластарға белем бирә.

Сажидә Наил ҡыҙы Мәләүез районы Ҡотлобулат ауылында 1963 йылдың 1 июнендә 5-се бала булып был матур донъяға ауаз һалған. Ғаиләлә иң кескәй бала булғас, уға наҙҙың да күберәге тейгән, әлбиттә. Атаһы менән әсәһе ғүмер буйы колхозда алдынғылар рәтендә эшләй. Сажидә 8-се кластан һуң Салауат педагогия училищеһына уҡырға инә һәм уны уңышлы тамамлай. 1984 йылда үҙенең һөйгән егете Дамирға кейәүгә сығып, 3 балаға ғүмер бирәләр. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бер-береһен яратышып, ихтирам итеп оҙаҡ йәшәргә тура килмәй шул йәш ғаиләгә. Ире йөрәк сиренән вафат булып ҡала. Ауыр 90-сы йылдарҙа өс бала менән яңғыҙ ҡалған ҡатындың ата-әсәһе, туғандары һәр саҡ янында була, хәлдәренән килгәнсә ярҙам итеп тора. Һуңыраҡ ул Мөҙәрис тигән ир менән таныша һәм уға кейәүгә сыға. Уның менән ингә-иң терәшеп, балаларына ел-дауыл тейҙермәй үҫтерәләр.

Педагогик тәжрибәһен үҙенең тыуған ауылы Ҡотлобулатта башланғыс класс уҡытыусыһы булып башлап ебәрә, һуңғараҡ Мәләүез ҡалаһының 1-се гимназияһында 13 йыл эшләй. Тынғыһыҙ уҡытыусыны Өфөгә эшкә саҡырып алалар. Бер ерҙә лә үҙен һынатмай Сажидә. "Альфа" мәктәбендә эшләгән сағында хатта Англияға барырға тура килә. Был мәктәп балалары йыл да өсәр аҙнаға ошо илгә тәжрибә тупларға бара. Был юлы мәктәп директоры Галина Николаевна балалар төркөмө менән сит илгә барырға класс етәксеһенә, Сажидә Наил ҡыҙына, тәҡдим яһай. Әлбиттә, инглиз телен белмәгән башҡорт теле уҡытыусыһы башта баҙап ҡала. Был илдә бер нисә мәртәбә булып ҡайтҡан һәм телде лә яҡшы белгән уҡыусылары класс етәкселәрен өгөтләп күндерәләр...

...Сажидә Наил ҡыҙы күптән түгел балаҫ һуғыу һөнәрен үҙләштерә башлаған. Уның ҡартнәнәһе сепрәк балаҫтар һуғыуға бик маһир кеше булған. Шуларҙы ситтән күҙәтеп үҫкән ҡыҙҙың да балаҫ һуғыу теләге тыуған. Әммә бәләкәй булғанлыҡтан, ҡартнәнәһе бәләкәй ҡыҙҙы был станокка яҡын да ебәрмәгән. Ә шулай ҙа был ҡыҙыҡһыныу йылдар үткәс тә үҙенекен итә: бынан алты йыл элек ул интернеттан беренсе өҫтәл станогын яҙҙыртып алып, эшкә тотона. Былай ҙа тынғы белмәгән ханым, төн йоҡоларынан яҙып, интернеттан сыҡмай. Барыбер яйлап был эшкә өйрәнеп китә. Әлеге ваҡытта элек балаҫ һуғыу оҫтаһы булған өлкәнәйгән ҡәйнәһенең аҡыллы кәңәштәре менән эш итә. Ҡәйнәһе өйрәнсек килененән бер ни ҙә йәлләмәй. Эшен дауам итеүсеһенә ҡылыстарын, көрәләрен бүләк итҡән дә инде. Йөндө буярға элекке буяуҙарын да биргән. Епте нисек көрөнән үткәрергә лә Сажидә ханым ҡәйнәһенән өйрәнгән.

Сажидә быйыл тулаға туҡыма һуҡҡан. Заказға башҡорт шәле лә һуғып биргән. Бындай эштәргә тотоноу өсөн, әлбиттә, интернет ярҙамы ғына етмәй. Был ваҡытта бәләкәйҙән әсәһенең балаҫ һуҡҡанын күреп үҫкән тормош иптәше Мөҙәрис һәм әхирәте Гүзәл Мостафина уға ярҙамға килә. Бергәләп станокка еп тә үткәрәләр, төрлө техникалар ҙа өйрәнәләр. Сажида Наил ҡыҙының ҡыҙҙары ла әсәйҙәренең һуҡҡан балаҫтарына битараф түгел, тик әлегә станок артына ултырырға ваҡыттары юҡ, белем алыу юлындалар. Нисек кенә булмаһын, был һөнәр уларҙың ғаиләһендә юғалмаҫ, тип ышана Сажидә Наил ҡыҙы.

**Фирҙәүсә ҒӘЗИЗОВА.**

# АУЫЛ ҠОТОН АРТТЫРА...

**Район ауылдары буйлап йөрөгәндә, бөгөнгө ҡиммәтселек заманына ҡарамай, халыҡтың дәртләнеп донъя көтөүен күреп, күңел кинәнә. Халыҡтың уңғанлығы бигерәк тә йәй көнө ихаталар гөл-сәскәгә күмелгән ваҡытта күренә. Ауыл урамдарына йөнә матур биҙәкле тәҙрә ҡапҡаслы йорттар, ҡапҡалар, уның тышындағы фигуралы ултырғыстар йөм бирә.**

Ә бына Мәләүез районы Дәүләткол ауылында юлдан килеүселәрҙе тау битләүендәге Башҡортостан һәм Рәсәй флагтары, башҡорт халҡының милли геройы Салауат Юлаев, 1773-1775 йылғы Крәстиәндәр һуғышы юлбашсыһы Емельян Пугачев һындары, саҡ ҡына уңғараҡ тимерҙән эшләнгән пушка ҡаршы ала. Кешеләрҙең улар янында төшкән фотоларын йыш ҡына "Бәйләнештә" социаль селтәрендә осратырға мөмкин. Былярҙың барыһын да ауыл старостаһы Ғәйнулла Рахманғолов эшләгән. Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығына быltыр үҙенең йорто алдына Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы легендар Т-34 танкын ҡороп ултырткайны. Унда шулай уҡ балалар өсөн карусель, самолет урынлашҡан.

Яңыраҡ иһә Һуҡайлы йылғаһы күперен сыҡҡас, 100 метр тирәһе һулаҡайҙа, Аҡбуҙат һыны пәйҙә булды. Ул өс метр бейеклектәге бағанаға беркетелгән.

- Башҡорт мифологияһындағы ошо кешегә ауыр ваҡытта ярҙам иткән, ҡанатлы, ерҙә лә, күктә лә йөрөй алған илаһи ат образын эшләү идеяһы Бөрйән районына Шүлгәнташ мәмерйәһенә барып ҡайтҡас барлыҡҡа килде, - ти уның авторы. - Эшемдең һөҙөмтәһен күреү, тыуған ауылым мәнфәғәтенә хеҙмәт итеү



*Һуҡайлы йылғаһы янындағы Аҡбуҙат.*

мөмкинлеге булыуына, әлбиттә, мин бик шатмын. Алдағы көндәрҙә оҙаҡ йылдар Ерген ауылы эргәһендәге юл буйына тыуған районымдың, ауылымдың беренсе тракторсылары иҫтәлегенә ҡуйылған, бөгөн ҡаланың Геройҙар аллеяһынан урын алған тракторҙың һынын эшләп, урамға ултыртырға ниәтләйем.

Эпостарҙа күктә тыуып, күктә үҫкән, ҡылдары тылсымға эйә булған, ҡайһы бер халыҡ ижады өлгөләрендә һыу аҫты донъяһынан сыҡҡан тип тасуирланған Аҡбуҙат образы - Ғәйнулла Рахманғоловтың етенсе ижади эше. Быуаттар буйына йылҡысылыҡ менән ғүмер иткән башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадында ат образы ҙур урын биләй. Ышаныуҙар буйынса, ат мал ҡото, йорт-ҡура ырыҫы тип тә иҫәпләнә. Һуҡайлы ярындағы Аҡбуҙат та Дәүләткол ауылы халҡын, ғөмүмән, ошо тирәләге тораҡ пункттарҙы бәлә-ҡазанан һаҡлап торһон, тип юрайыҡ. Юрағандар юш килә бит ул.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

*✓ Бала тыуғанда, йәштәр яңы тормош башлағанда, ғаилә ҡорғанда, кеше тормошоноң һәр ошондай иҫтәлекле осоронда ата-бабаларҙан ҡалған йолаларҙы үтәү - ул һинең булмышыңа ырыҫ, тоҡомоңа ҡот һалыу тигәнде аңлатҡан.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҠЫҪЫЛМА...

## кеше эшенә

■ Рухи сәләмәтлек нигеҙендә ябай ғына ҡағиҙәләр ята, тип белдерә белгестәр. Уның беренсеһе булып кеше эшенә ҡыҫылмау тора. Донъяла бер төрлө фекер йөрөткән, бер төрлө булған кешеләр юҡ - Аллаһы Тәғәлә беҙҙе төрлө итеп яратҡан. Шуға ла үҙ дөрөҫлөгөңдө кешегә көсләп тағырға кәрәкмәй. Ғәфү итә һәм онота белеү - күңел тыныслығына өлгәшеү өсөн һөҙөмтәле сара. Тормош шул тиклем ҡыҫҡа, ҡасандыр кемдер һеҙҙе рәнйеткән өсөн йөрәктә таш йөрөтөү уны мәғәнәһеҙерәк итәсәк. Өсөнсө кәңәш - йәмғиәттә абруй яуларға ынтылмағыҙ. Донъяла эгоистар шул тиклем күп, шәхси мәнфәғәтен алға ҡуйыусы бер ҡасан да башҡаларҙы баһаламаясаҡ. Етмәһә, бөтөн яҡтан камил кешеләр булмай, шулай булғас, ни өсөн һеҙ үҙегеҙ кеүек үк кешенең маҡтауына лайыҡһығыҙ? Көнләшеү, башҡаларҙы үҙгәртергә тырышыу ҙа рухи тыныслыҡҡа эйә булырға ҡамасаулаясаҡ.

■ Баш ауыртыуының сәбәптәре төрлө була ала, мәҫәлән, хроник арыу, көсөргәнеш кисереү һәм һәр осраҡта табип менән кәңәшләшеү мотлаҡ. Шулай ҙа нисек туҡланыуығыҙға ла иғтибар бирегеҙ, ти белгестәр. Улар 4 ризыҡты рациондан алып ташларға кәңәш итә. Уларҙың беренсеһе - оҙаҡ һаҡлана торған сырҙар. Уларҙың составындағы тирамин ҡан тамырҙарына насар йоғонто яһай, ҡан баҫымын күтәрә. Баш йыш ауырығанда сырҙың фета, моцарелла, пармезан кеүек төрҙәрен бөтөнләй ашамағыҙ. Сырҙы эремсек менән алыштырыу дөрөҫөрәк. Икенсеһе - һалҡын эсемлектәр. Бер стакан татлы эсемлектән һуң ҡанда глюкоза кимәле ҡапыл күтәрелә һәм ҡан тамырҙарының ҡапыл ҡыҫылыуына, һөҙөмтәлә, баш ауыртыуына килтерә. Баш ауыртҡанда ҡәһүәне айына бер тапҡыр ғына эсергә ярай, сөнки ул ҡан баҫымын күтәрә. Исемлектең дүртенсе юлын банан алып тора. Уның ҡабығында шулай уҡ тирамин бар.

■ Ҡатын-ҡыҙҙың хәтере ҡыҫҡа тиһәләр ҙә, ғалимдар раҫлауынса, гүзәл заттың хәтере уның тән төҙөлөшөнә бәйле, имеш. АҠШтың Төньяҡ-көнсығыш университеты эргәһендәге медицина колледжы ғалимдары раҫлауынса, груша фигуралы ҡатын-ҡыҙҙарҙың хәтере күпкә насарыраҡ була икән. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, алма фигуралыларҙың һөҙөмтәләре башҡаларға ҡарағанда яҡшыраҡ булып сыҡҡан.

■ Стокгольм университеты ғалимдары раҫлауынса, мармелад, емеш желелары, төрлө ҡайнатмалар сәләмәтлек өсөн мотлаҡ кәрәк, сөнки уларҙың составындағы пектин организмдан зарарлы матдәләрҙе сығарыуға булышлыҡ итә. Пектин - үҙенсәлекле химик структураға эйә булған үҫемлек сығышлы углевод. Ул организмдан ауыр тоҙҙарҙы, свинец һәм башҡа матдәләрҙе сығарыу һәләтенә эйә. Еләк-емеш желеһы һәм мармелад организмдың бөтөн проблемаларын хәл итә алмаһа ла, күп белгестәр иҫәпләүенсә, был татлы ризыҡтарҙы көн һайын ашау күңелһеҙ өҙлөгөүҙәр хәүефен күпкә түбәнәйтә.

■ Фастфуд менән артыҡ мауығыу балаларҙа астма һәм экзема сирҙәренең барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ итә. Ғалимдар раҫлауынса, был ризыҡтарҙағы зарарлы матдәләр ауыр формалағы астманың барлыҡҡа килеү хәүефен үҫмерҙәр араһында - 38, ә 6-7 йәшлек балалар араһында 27 процентҡа күтәрә. Ул шулай уҡ экзема һәм риниттың сәбәпсеһе булып тора. Фастфудты емеш-еләк, балыҡ, ҡуҙаҡлылар менән алыштырыу уның эҙемтәләрен кәметеүгә һәм был сирҙәрҙе иҫкәртеүгә булышлыҡ итә, ти Австралияның Аделаида университеты ғалимдары.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

# ЙӨРӘКТӘРЕНДӘ...

## Бәндәбикәләребеҙ тоҡандырған ҡуҙ баҙлай

**Фольклориаданы иң ныҡ көткән һәм иң ныҡ әҙерләнгәндәр - улар ағинәйҙәр, тиһәк, бер ҙә арттырыу түгел һымаҡ. Эйе, ошо бер тиҫтә йыл эсендә "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары булған энтузиаст, вайымлы, зыялы ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ башҡорт мәҙәниәтенең "Фольклор" тигән майҙанына йән өрҙө, милли кейемдең ырыу, төбәккә хас өлгөләрен, һаҡал, яға, селтәр, хәситә, алмиҙеү кеүек биҙәүестәрҙе, ҡашмау, ҡалфаҡ, таҡыя кеүек баш кейемдәрен, ситек, ҡата, сарыҡ кеүек аяҡ кейемдәрен тергеҙеп, был матурлыҡҡа бар гүзәл заттарҙың иғтибарын йәлеп иттерҙе. Бөгөн улар үҙҙәре лә ошо матурлыҡҡа төрөнөп, ауыл, район, ҡала кимәлендә байрамдар ойоштора, йолалар үткәрә, кәсептәргә яңы һулыш өрә, республикала үткән бар мәҙәни сараларҙың уртаһында йөрөй. Әйҙәгеҙ, республика ағинәйҙәренең үҙҙәрен тыңлайыҡ әле.**

**➔ Беҙҙең ағинәйҙәр ысынлап та "Фольклор" тигән майҙанды йәнләндереп, терелтеп, мәҙәниәтебеҙҙең үҫешен алға әйҙәүселәр бит...**

**Рәшиҙә Ғиззәтуллина, Бөрйән районының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе:** Атҡарған эштәребеҙ быға яуап, әлбиттә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бынау тажлы зәхмәт арҡаһында Фольклориада сараларының уртаһында була алмаясаҡбыҙ. Ләкин беҙҙең ошо ун йыл буйы эшләгән эштәребеҙ һөҙөмтәһе барыбер ҙә был донъя кимәлендәге байрамды







биҙәйәсәк, сөнки тап "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары беҙҙең мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренә онотола яҙған фольклор өлгөләрен тергеҙергә ярҙам итте, күп ағинәйҙәр мәҙәниәт йорттары эргәһендәге фольклор төркөмдәренә йәлеп ителеп, уларҙың эшен күтәрмәләне. Бөгөнгө сараларҙың бер өлөшө булған күргәҙмәләрҙә лә ошо ойошма ағзалары тергеҙгән йә тергеҙеүгә булышлыҡ иткән кәсепселек өлгөләре ҡуйыласаҡ бит. Мәҫәлән, Бөрйән районына киләсәк сит ил ҡунаҡтары ағинәйҙәрҙең ҡорамаларынан, сергетыштарынан торған күргәҙмәләр менән танышасаҡ. Хәҙер инде Бөрйән сергетышы Эксперт советының ҡарары менән Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының матди булмаған мәҙәни мираҫы Берҙәм реестрында ла теркәлде. Тимәк, был кәсепте киң йәйелдереүҙе дауам итәсәкбеҙ. Ул киләсәктә беҙҙең Бөрйәндәге этнотуризм сараларының бер биҙәгенә әүереләсәк.

"Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары халҡыбыҙҙың милли һәм мәҙәни рухы һағында. Рух йәшәһә, халыҡ йәшәйәсәк. Милли рухты, асылында тәрбиә ҡанундары ятҡан матур йолаларыбыҙҙы һаҡлау йәһәтенән ауыл ағинәйҙәре ифрат та ҙур эштәр башҡара. Мәҫәлән, әле ошо арала ғына Брәтәк ауылының "Айсулпан" ағинәйҙәр ҡоро йәш киленгә һыу юлы күрһәтеү йолаһын үҙ асылына бороп, уны тотош ауыл байрамына әйләндерҙе. Йолалар - ул күңел асыр тамаша ғына түгел, ул аңыбыҙҙа, булмышыбыҙҙа урын алыр көнитмеш, йәшәйеш ҡағиҙәһе. Шуға ла бала тыуғанда, йәштәр яңы тормош башлағанда, ғаилә ҡорғанда, ғөмүмән, кеше тормошоноң һәр ошондай иҫтәлекле осоронда ата-бабаларҙан ҡалған йолаларҙы үтәү - ул һинең булмышыңа ырыҫ, тоҡомоңа ҡот һалыу тигәнде аңлатҡан. Ағинәйҙәребеҙҙең "Йолалы булайыҡ!" тигән саҡырыуы бушҡа түгел, тимәк.

**Мәрзиә Солтанбаева, Учалы районының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе:** Эйе, республика ағинәйҙәре бик күп эштәргә башланғыс һалды. Улар тергеҙгән рухи һәм матди ҡомартҡыларыбыҙҙы һанап тормайым. Ә бына беҙҙең ағинәйҙәрҙең балалар баҡсаларындағы, мәктәптәрҙәге өләсәй ролендә башҡарған эштәрен нисек баһаламаҫһың! "Ауылпиада" тигән сарала иһә улар ҡышын да, йәйен дә балалар менән бергә төрлө уйындар ойоштороп, уларҙы самауыр сәйе, ҡоймаҡ менән һыйлап, шулай уҡ күмәк аралашыуҙарға йәлеп итәләр. Бындай эштәре менән улар балалар аңына халҡыбыҙҙың тәрбиә мәктәбе һабаҡтарын һеңдерәләр икәне бәхәсһеҙ.

Башҡорт халыҡ аш-һыуҙарын тергеҙеүҙе лә ошо ойошма ағзалары башламанымы ни? Быға саҡлы сауҙа нөктәләрендә һатылған ризыҡтарға ғына мөрхәтһенеп, анһатҡа һалышҡайны бит халыҡ. Беҙҙең ағинәйҙәр иһә йә буҙа ҡойоу, йә талҡан эшләү, йә һыйыр ағынан әҙерләнгән ризыҡтар әҙерләү серҙәре менән уртаҡлашып, күргәҙмәләр ойоштороп, барыһында ла был файҙалы ризыҡтарыбыҙға ҡыҙыҡһыныу уятты. "Үҙ ризыҡтарыбыҙҙан яҙмайыҡ, беләктәрегеҙгә, йөрәктәрегеҙгә көстө үҙ ризыҡтарығыҙҙан ғына ала алаһығыҙ, магазин кәштәһендәге файҙаһыҙ тәм-томға алданмағыҙ", - тигән өгөт-нәсихәтен бирә йөрөй улар һәр ерҙә, һәр кемгә.

Бына әле тағы бер инициативаға юл башлап тора учалылар: ер-һыу атамаларын өйрәнәләр. Был бик тә көнүҙәк проблема, сөнки ер-һыу атамаларыбыҙ күҙ алдында боҙола ғына түгел, урыҫлаштырыла. Хатта вағыраҡ, ауылдар кимәлендәге атамалар ҙа үҙгәргәненә шаһит булабыҙ. Шуның менән тарихи хәтер ҙә юғала. Бына шуға ла Учалы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары бынан бер нисә йыл элек үк бик ваҡытлы тәҡдим күтәрҙе: ауылдарыбыҙ тирәһендәге барлыҡ атамаларҙың исемлеген төҙөйөк, легендаларын да иҫкә төшөрәйек.

**Нурия Ҡунысбаева, Ейәнсура районының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе:** Халҡыбыҙҙың күҙ ҡараһылай һаҡлап килгән бик күп йола-ғөҙәттәре, традициялары онотолоп бөтөп бара ине. Шуларҙы тергеҙеүҙә, йәш быуынға түкмәй-сәсмәй еткереүҙә ағинәйҙәрҙең роле баһалап бөткөһөҙ. Сөнки халҡыбыҙҙы милли йолаларыбыҙ, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙ, Исламдың әхлаҡи ҡиммәттәре, иман нигеҙҙәре һаҡлап килгән. Быуындан-быуынға күсә килгән нәсихәттәр, иман доғалары, мөнәжәттәр аша килгән аҡыл йөрәккә бер тәғлимәт-ҡағиҙә булып уйылған. Аллаға шөкөр, иман тәрбиәләүсе мөнәжәттәребеҙ яңынан тергеҙелде. Уларҙы йыйыу, табыу, башҡарыусыларҙы туплауҙы маҡсат итеп ҡуйған төбәк-ара конкурстарҙы ла башлыса ағинәйҙәр ойошторҙо. Район мәҙәниәт бүлеге, мәҙәниәт йорто хеҙмәткәрҙәре ошондай осраҡтарҙа, мәҫәлән, мөнәжәт, сәсәндәр бәйгеләре ойошторғанда ағинәйҙәргә мөрәжәғәт итә, милли биҙәүестәрҙе, кейемдәрҙе тергеҙеүҙә ярҙам һорай, уҡытыусыларыбыҙ ҙа һөнәри бәйгеләрҙә ҡатнашҡанда милли кейем, һәр ерлектең үҙенсәлектәре буйынса кәңәш-төңәш итә - был беҙҙең эшебеҙгә оло мәртәбә.

Мин үҙебеҙҙең район мәҙәниәт бүлегенә рәхмәтлемен: бергә эшләйбеҙ. Районда үткән һәр төрлө конкурстар, шәл байрамдары ағинәйҙәрһеҙ үтмәй. Йыл һайын үткән "Һылыуҡай" бәйгеһендә ағинәйҙәр үҙ һылыуҡайын һайлай, инсафлығы, күркәмлеге, тәбиғилеге менән айырылып торған һылыуҡайға бүләк тапшыра. Милләт бишеген тирбәтер йәш ҡыҙҙарыбыҙға ағинәй нәсихәте еткерелә: "Намыҫлы бул, гонаһтан ҡурҡ, ояла бел. Ҡыҙ байлығы - күркәм холоҡ, ти халҡыбыҙ. Йөрәгеңдә Бәндәбикәләребеҙ яҡҡан милләт усағының ҡуҙы баҙлаһын, милләт сәңгелдәгенең йылыһы күңелеңде йылытһын, бәпләһен, рух көсө булмышыңа ҡот өҫтәһен. Ҡыҙ бала булып тыуғанһың икән, сабыр бул, инсафлы, әҙәпле, мәрхәмәтле бул!" "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзаларының төп бурысы ла - кескәй генә, бала ғына



### 5 ИЮЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.40, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.10, 4.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Большое небо". [12+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.50 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Косатка". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "За счастьем". [12+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия-5". [12+]
4.05 Т/с "Женщины на грани". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Салям, фольклориада!"**
**9.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15, 22.00 "Сердце фольклориады". [12+]**
**10.45, 17.45, 23.30 Дневник VI Всемирной Фольклориады-2021. [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час. Фольклориада.**
**13.00, 23.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бахетнамә. Фольклориада.**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Эллэсе... [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 "Медовая страна". [6+]**
**16.45 Посмотрим... [12+]**
**17.30 "Пофутболим?" [12+]**
**18.00 "Сердце фольклориады".**
**0.00 Х/ф "Лабиринты прошлого". По окончании: Новости (на баш. яз.). [16+]**
**2.45 Бахетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Мою жену зовут Морис". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 6 ИЮЛЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.35, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.10, 3.55 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Большое небо". [12+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.50 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 23.20 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Косатка". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "За счастьем". [12+]
23.50 Футбол. Чемпионат Европы-2020. 1/2 финала. Прямая трансляция из Лондона.
2.00 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
4.20 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Салям, фольклориада!"**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15, 22.00 "Сердце фольклориады". [12+]**
**10.45, 17.45, 23.30 Дневник VI Всемирной Фольклориады-2021. [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час. Фольклориада.**
**13.00, 23.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бахетнамә. Фольклориада.**
**14.30 "Дорога к храму". [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Нурбостан сәйәхәте. [6+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 "Страна Северных Амуров". [6+]**
**16.45 "Кумысный путь". [0+]**
**17.15 "Уфимское "Времечко". Народные новости". .**
**18.00 "Сердце фольклориады".**
**0.00 Х/ф "Вечность между нами". По окончании: Новости (на баш. яз.). [12+]**
**2.15 Бахетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Озеро моей души". [12+]**
**4.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**5.00 "Бай". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 7 ИЮЛЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.55, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.10, 4.10 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Большое небо". [12+]
22.20 Вечерний Ургант. [16+]
23.00 Наедине со всеми. [16+]
23.45 Чемпионат Европы по футболу-2020. Полуфинал. Прямой эфир из Лондона.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Косатка". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "За счастьем". [12+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия-6". [12+]
4.05 Т/с "Женщины на грани". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Салям, фольклориада!"**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15, 22.00 "Сердце фольклориады". [12+]**
**10.45, 17.45, 23.30 Дневник VI Всемирной Фольклориады-2021. [12+]**
**11.15 Автограф. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час. Фольклориада.**
**13.00, 23.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бахетнамә. Фольклориада.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [0+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Преград.net. Мобильная помощь на дому. [6+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 "Страна поющих цветов". [6+]**
**16.45 Посмотрим... [12+]**
**18.00 "Сердце фольклориады".**
**0.00 Х/ф "Последняя женщина на Земле". По окончании: Новости (на баш. яз.). [16+]**
**2.15 Бахетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Белые ночи Акмуллы". [12+]**
**4.30 Әлләсе... [12+]**
**5.15 Медовая страна. [6+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 8 ИЮЛЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55, 2.50, 3.05 Модный приговор. [6+]
12.10, 0.35 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.10, 3.45 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Большое небо". [12+]
22.30 Вечерний Ургант. [16+]
23.50 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Косатка". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "За счастьем". [12+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия-6". [12+]
4.05 Т/с "Женщины на грани". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Салям, фольклориада!"**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15, 22.00 "Сердце фольклориады". [12+]**
**10.45, 17.45, 23.30 Дневник VI Всемирной Фольклориады-2021. [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час. Фольклориада.**
**13.00, 23.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бахетнамә. Фольклориада.**
**14.30 Автограф. [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Посмотрим... [12+]**
**17.15 "Уфимское "Времечко". Народные новости".**
**18.00 "Сердце фольклориады".**
**0.00 Х/ф "Коля - перекати поле". По окончании: Новости (на баш. яз.). [12+]**
**2.15 Бахетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Индийская насмешница". [12+]**
**4.30 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 9 ИЮЛЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55, 3.00 Модный приговор. [6+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.50 Давай поженимся! [16+]
16.10, 4.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 Премьера. "Dance Революция". [12+]
23.15 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/ф "Стивен Кинг: Повелитель страха". [16+]
1.10 Юбилей группы "Цветы" в Кремле. [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.30, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Т/с "Косатка". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.00 Я вижу твой голос. [12+]
22.40 Х/ф "Мой близкий враг". [12+]
2.25 Х/ф "Я его слепила". [12+]
4.10 Т/с "Женщины на грани". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Салям, фольклориада!"**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15, 22.00 "Сердце фольклориады". [12+]**
**10.45, 17.45, 23.30 Дневник VI Всемирной Фольклориады-2021. [12+]**
**11.15 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 4.30 Автограф. [12+]**
**13.00, 23.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Ҡурай даны". [12+]**
**14.30 Башҡорттар. [6+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15, 5.00 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Взлетай! " Репортаж с Третьего форума школьного образования. [6+]**
**16.30 "Войлочная страна". [12+]**
**17.00 Посмотрим... [12+]**
**18.00 "Сердце фольклориады".**
**0.00 Х/ф "Инопланетный код". По окончании: Новости (на баш. яз.). [18+]**
**2.15 Спектакль "Шәүрәкәй". [12+]**
**4.00 Детей много не бывает. [12+]**
**5.45 "Млечный путь". [12+]**

### 10 ИЮЛЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Д/ф "Голос русской души". К 75-летию Валентины Толкуновой. [12+]
15.00 Д/ф "Наталья Варлей. "Свадьбы не будет!" [12+]
16.05 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
17.35 "Аль Бано и Ромина Пауэр: "Felicita на бис!" Юбилейный концерт в Кремле. [12+]
19.10, 21.20 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
22.30 Премьера. "Выпускник-2021". [12+]
0.25 Х/ф "Загадка Анри Пика". [16+]
2.05 Модный приговор. [6+]
2.55 Давай поженимся! [16+]
3.35 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 20.00 Вести.
11.30 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.35 Доктор Мясников. [12+]
13.40 Т/с "Полоса отчуждения". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Токсичная любовь". [12+]
1.05 Х/ф "Мезальянс". [12+]
4.16 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Салям, фольклориада!"**
**9.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 "Сердце фольклориады". [12+]**
**10.45, 17.15, 23.30 Дневник VI Всемирной Фольклориады-2021. [12+]**
**11.00 "Книга сказок". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [0+]**
**11.30 "Байтус". [6+]**
**11.45 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Колесо времени. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". Концерт по заявкам телезрителей. [12+]**
**16.00 "Ҡош юлы. Балалар". Гала-концерт. [12+]**
**17.30 Церемония закрытия VI Всемирной Фольклориады.**
**22.00 Церемония закрытия VI Всемирной Фольклориады.**
**23.00, 2.00 Новости (на баш. яз.).**
**0.00 Х/ф "Когда я умирала". По окончании: Новости (на баш. яз.). [16+]**
**2.30 Спектакль "Не улетайте, журавли". [12+]**
**4.00 Әлләсе... [12+]**
**4.45 Караоке по-башкирски. [12+]**
**5.15 "Весело живем!" [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

### 11 ИЮЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 6.10 Т/с "Петербург. Любовь. До востребования". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.15 Жизнь других. [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Д/ф Премьера. "Русский Север. Дорогами открытий". [0+]
15.15 Д/ф "Александр Абдулов. "Жизнь на большой скорости". [16+]
17.05 "День семьи, любви и верности". Праздничный концерт. [12+]
19.15 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
21.00 Время.
22.00 "Что? Где? Когда?" Летняя серия игр. Финал. [16+]
23.10 Х/ф "Какими вы не будете: "Лев Яшин. Вратарь моей мечты". [6+]
1.20 Х/ф "Пираньи Неаполя". [18+]
3.10 Модный приговор. [6+]
4.05 Давай поженимся! [16+]

### РОССИЯ 1

4.20 Х/ф "Счастливый маршрут". [12+]
6.00 Х/ф "45 секунд". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Устами младенца.
9.20 Когда все дома.
10.10 Сто к одному.
11.00 Большая переделка.
12.00 Парад юмора. [16+]
14.00 Т/с "Полоса отчуждения". [12+]
17.50 Х/ф "Сердечных дел мастера". [12+]
20.00 Вести.
21.35 Х/ф "Тренер". [12+]
23.50 Футбол. Чемпионат Европы-2020. Финал. Прямая трансляция из Лондона.
3.00 Д/ф "Тренер". [16+]
4.17 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 Церемония закрытия VI Всемирной Фольклориады. [12+]**
**10.45, 17.00, 23.00 Дневник VI Всемирной Фольклориады-2021. [12+]**
**11.00 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 Нурбостан сәйәхәте. [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Праздничный концерт ко Дню семьи, любви и верности. [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". Концерт по заявкам телезрителей. [12+]**
**15.15 Посмотрим... [6+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.15 "Все песни о прекрасном". Концерт. [12+]**
**18.45 Лидеры региона. [12+]**
**19.15 "Байык-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.30 "Вассалям!" [12+]**
**0.00, 4.30 Х/ф "Сладкое прощание Веры". [16+]**
**1.30 Спектакль "Чужой ребенок". [12+]**
**3.45 "Млечный путь". [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Июль (Зөлҡағиҙә - Зөлхизә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 5 (24) дүшәмбе | 3:19 | 4:49 | 13:30 | 20:21 | 21:51 | 23:21 |
| 6 (25) шишәмбе | 3:20 | 4:50 | 13:30 | 20:21 | 21:51 | 23:21 |
| 7 (26) шаршамбы | 3:21 | 4:51 | 13:30 | 20:20 | 21:50 | 23:20 |
| 8 (27) кесе йома | 3:22 | 4:52 | 13:30 | 20:19 | 21:49 | 23:19 |
| 9 (28) йома | 3:23 | 4:53 | 13:30 | 20:18 | 21:48 | 23:18 |
| 10 (29) шәмбе | 3:25 | 4:55 | 13:30 | 20:17 | 21:47 | 23:17 |
| 11 (1) йәкшәмбе | 3:26 | 4:56 | 13:30 | 20:16 | 21:46 | 23:16 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ Беренсе синыфтан яҡшы өлгәшкән, үҙен төрлө яҡтан үҫешкән шәхес итеп танытырға өлгөргән 10 уҡыусы "Ҡыҙыл аттестат" һәм алтын миҙал менән бүләкләнде.



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ХАЛЫҠ МУЗЫКА ҠОРАЛДАРЫ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**26-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Өммәт. Ҡараҫҡы. Украин. Арыш. Нағыш. Емеш. Сүмәлә. Өмөт. Ион. Өйрәк. Ағыу. Өрөк. Ағас. Рассел. Ватан. Ағуна. Ашуғ. Ҡуян. Нәҫел. Елән. Әсәй.

**Вертикаль буйынса:** Нәзиров. Урғуян. Ут. Шөкөрана. Ҡала. Шәһиев. Инеш. Мурзин. Саған. Өкө. Әшнә. Түшәм. Урыҫ. Тоҡса. Елкә. Аристократ. Айсыҡ. Шешә. Әхмәҙуллин.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ЛИМОН ҺӘМ БАЛ...



**Бер бик билдәле онколог өй шарттарында әҙерләп булған төрлө заман ауырыуҙарынан арыныу ысулы менән бүлешә. Был дауа беҙгә тәбиғәт тарафынан бирелгән һәм артыҡ сығымдар ҙа, ваҡыт та талап итмәй. Әммә уның шифаһы бөтә эске ағзалар эшен яйға һалыу, иммунитетты нығытыу, матдәләр алмашыныуын яйға һалыу, ҡан составын яҡшыртыу һәм ҡан тамырҙарын таҙартыу көсөнә эйә.**

Атап әйткәндә, ул йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын дауалау, бауыр, бөйөр һәм тын алыу юлын таҙартыу, ашҡаҙан-эсәк юлын патоген микрофлораларҙан таҙартыу, баш мейеһе эшмәкәрлеген һәм хәтерҙе яҡшыртыу, операция кисергәндән һуң хәлде яҡшыртыуға булышлыҡ итеү, төрлө шештәр һәм карциноманы дауалау өсөн ҡулай сара. Бынан тыш, ул матурлыҡты, йәшлекте һәм тәндең энергияһын һаҡлай. Сөнки уның составында барлыҡ кәрәкле витаминдар, минералдар, биологик актив матдәләр, аҡһым, углевод һәм үҫемлек майҙары бар.

Шифалы сараны әҙерләү өсөн 7 лимон, 7 теш һарымһаҡ, 500 мл натураль бал, 250 грамм шыттырылған бойҙай, 30 грамм таҙартылған әстерхан сәтләүегe кәрәк. Шыттырылған бойҙайҙы блендер ярҙамында иҙеп, әстерхан сәтләүеген, һарымһаҡты һәм ҡабығы әрселмәгән 3 лимонды ҡушырға. Ҡалған 4 лимондан һут яһап, ҡатышмаға ҡойорға. Бал ҡушырға һәм ҡуйылығы бер төрлөгә әүерелгәнсе болғатырға. Әҙерләмәне стериль быяла банкаға һалып, ауыҙын яҡшылап ябырға. Ҡатышманы тик һыуытҡыста ғына торорға кәрәк. Уны 3-4 көн тотҡас ҡына әҙер була.

Ә нисек дауаланырға һуң? Бының ике төрлө юлы бар. Беренсеһе: иртәнге, төшкө, киске аштан һәм йоҡларҙан ярты сәғәт алда 1-2 балғалаҡ ашарға. Икенсеһе: яман шеш менән ауырығанда һәр ике сәғәт һайын 1-2 балғалаҡ ашарға.

**Иҫкәрмә:** сәләмәтлегегеҙ насар булһа, халыҡ дауаһы ысулдарына мөрәжәғәт итерҙән алда дауалаусы табиптан кәңәш һорау мотлаҡ.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ



# ЕГЕРМЕНСЕЛӘР...

**Ошо көндәрҙә Башҡортостандың барлыҡ сығарылыш синыф уҡыусылары ҡулдарына аттестат алды һәм был уңайҙан һәр белем усағында тантаналы саралар ойошторолдо.**

Баш ҡаланың Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһында быйыл 45 йәш кешегә аттестат тапшырылды. Аттестаттарҙан тыш, физик әҙерлеге юғары булған ете уҡыусы "Хеҙмәткә һәм оборонаға әҙер" тигән алтын значок та алып шатланды. Беренсе синыфтан яҡшы өлгәшкән, үҙен төрлө яҡтан үҫешкән шәхес итеп танытырға өлгөргән 10 уҡыусы "Ҡыҙыл аттестат" һәм алтын миҙал менән бүләкләнде.

Улар араһында рус теленән Берҙәм дәүләт имтиханында 100 балл йыйыусы Юлиә Хәлилова ла бар. "Мин был гимназияла беренсе синыфтан алып белем алдым һәм ул минә үҙ өйөм кеүек яҡын, уҡытыусыларыбыҙ, синыфташтарым менән ҙур бер ғаилә кеүекбеҙ. Шуға ла бөгөн шундай хистәр сорнай күңелде: алда ҡыҙыҡлы студент йылдары көтә, әммә яратҡан гимназиябыҙ менән хушлашырға тура килә. Мин киләсәктә табип һөнәрен үҙләштерергә ниәтләйем, Башҡорт дәүләт медицина университеты студенттары сафын тулыландырырмын, тип хыялланам", - ти ҡыҙыҡай.

Әйткәндәй, гимназияның барлыҡ сығарылыш уҡыусылары ла имтихандарҙы бик уңышлы тапшырған һәм белемен ҡайһы юҫыҡта дауам итерен күптән күҙаллап ҡуйған. Алтын миҙалсыларҙың береһе Фирүзә Яҡшығолова киләсәктә иҡтисадсы булырға хыяллана, шуға математика, йәмғиәтте өйрәнеү, рус теле буйынса имтихандар тапшырған. Ә шулай уҡ тик "бишле"гә өлгәшкән Сөмбөл Мостафина Башҡорт дәүләт университетының химия факультетында уҡырға теләй икән. "Сөмбөлгә бәләкәйҙән химия һәм биология фәндәре оҡшай ине, Берҙәм дәүләт имтихандарын да яҡшы тапшырҙы. Химиянан 86 балл, рус теленән - 90, математиканан 75 балл алды. Хәҙерге йәштәрҙең алдан үҙенә билдәләгән маҡсаттары бар, шул һоҡландыра. Бына алдыбыҙҙа торған был йәштәр ҙә шундай аңлылар, маҡсатлы һәм тырыштар", - тип һоҡланыуын йәшермәй Сөмбөлдөң әсәһе, Башҡорт дәүләт университеты доценты Рәмзиә Мостафина.

Сығарылыш уҡыусылары яратҡан гимназияларына, уҡытыусыларына бағышлап шиғырҙар һөйләне, йыр бүләк итте. Уларҙы ата-әсәләр исеменән Башҡортостандың халыҡ артисы Рөстәм Ғиззәтуллин, "Башҡортостан" гәзите журналисы, Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге республика премияһы лауреаты Рәмилә Мусина тәбрикләп сығыш яһаны. Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһы директоры Зөлфиә Ғәлийәнова, синыф етәкселәре Зөлфиә Бураншина һәм Фирҙәүес Ҡотлогилдина иһә рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе. Балаларҙың маҡсатлы, белемгә ынтылыусан, инсафлы, игелекле, ихтирамлы булыуында ата-әсәләрҙең дә, гимназия коллективының да хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ, тип билдәләнде һәр сығышта.

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

✓ Һәр насарлыҡтан ике дарыу бар: беренсеһе - ваҡыт, икенсеһе - өндәшмәү.

(Француз мәҡәлә).



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ҺЕҘГӘ БАЙРАМ КИЛӘ!

**VI Бөтә донъя фольклориадаһы республиканың төрлө ҡала һәм районддары буйлап уҙасаҡ. "Үҙәк", "Төньяҡ", "Төньяҡ-көнбайыш" һәм "Көнсығыш" фестиваль округтарындағы саралар иртәнгә 12-нән киске 5-кә тиклем асыҡ һауала ойоштоЛа.**











**"Үҙәк" фестиваль округында** 14 ил вәкилдәре эшләй. **5 июлдә** Салауат ҡалаһында "Нефтехимик" мәҙәниәт йорто алдындағы майҙанда Австрия, Боливия, Словакия, Греция, Мексика, Индонезия һәм Рәсәй фольклор коллективтары сығыш яһай. **6 июлдә** Нуриман районы Красная Горка ауылында район мәҙәниәт йорто алдында Польша, Греция, Панама, Ҡаҙағстан; ошо уҡ көндә Стәрлетамаҡ ҡалаһының ҡала мәҙәниәт йорто алдында Словакия, Испания, Индонезия, Колумбия, Мексика, Болгария; **7 июлдә** Октябрьский ҡалаһында Ленин исемендәге үҙәк майҙанда Австрия, Боливия, Италия, Рәсәй, Болгария; **8 июлдә** Ҡырмыҫҡалы ауылында "Аҡҡүл" мәҙәниәт һәм ял паркында Словакия, Болгария, Колумбия, Мексика, Австрия, Рәсәй; ошо уҡ көндә Ауырғазы районы Талбазы ауылында район мәҙәниәт йорто алдында Боливия, Греция, Панама, Ҡаҙағстан, Италия, Испания; **9 июлдә** Благовещен ҡалаһында ҡала мәҙәниәт йорто алдында Словакия, Боливия, Италия, Греция, Панама, Рәсәй; ошо уҡ көндә Ишембай ҡалаһында ҡала мәҙәниәт йорто алдындағы Ленин исемендәге паркта Ҡаҙағстан, Австрия, Колумбия, Испания, Индонезия, Польша коллективтары сығыш яһай.

**"Төньяҡ" фестиваль округына** ингән райондарҙың Мишкә ауылында **5 июлдә** "Триумф" физкультура-һауыҡтырыу комплексы алдындағы майҙанда, **6 июлдә** Кариҙел ауылында район мәҙәниәт йорто алдында, **7 июлдә** Борай ауылында "Таныш" физкультура-һауыҡтырыу комплексы алдында, **8 июлдә** Аҫҡын ауылында район хакимиәте бинаһы алдындағы майҙанда Камерун, Палестина, Франция, Белоруссия, Төньяҡ Македония, Перу, Эквадор, Румыния һәм Үзбәкстан илдәренән фольклор коллективтары сығыш яһай.

**"Төньяҡ-көнбайыш" фестиваль округында** Дүртөйлө ҡалаһында **5 июлдә** Мәҙәни ял итеү үҙәге алдындағы майҙанда, **6 июлдә** Яңауыл ҡалаһында ауыл мәҙәни ял итеү үҙәге, **7 июлдә** Үрге Тәтешле ауылындағы мәҙәни ял итеү үҙәге, **8 июлдә** Нефтекама ҡалаһының мәҙәниәт һәм ял паркы сәхнәһендә, **9 июлдә** Илеш районы Үрге Йәркәй ауылында район мәҙәниәт йорто алдында Әзербайжан, Хорватия, Һиндостан, Эстония, Чили, Парагвай һәм Бенин фольклор коллективтары тамаша күрһәтә.

**"Көнсығыш" фестиваль округына** ингән Әбйәлил районы Асҡар ауылында **5 июлдә** район хакимиәте бинаһы алдында, **6 июлдә** Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылында район мәҙәниәт йорто алдында, **7 июлдә** Учалы ҡалаһы "Горняк" стадионының футбол яланында, **8 июлдә** Сибай ҡалаһында "Урал арьяғы" сауҙа үҙәге алдында, **9 июлдә** Белорет ҡалаһында "Металлург" кинотеатры бинаһы алдында Венгрия, Ҡырғыҙстан, Черногория, Коста-Рика, АҠШ, Швейцария, Албания илдәренән артистары сығыш яһай.

АФАРИН!

# АҺ, БЫЛ ҠЫҘҘАР!

**Хакасияла 30-сы тапҡыр "От ыры" - "Ут йыры" Бөтә Рәсәй этник эстрада конкурсы уҙҙы.**

Был конкурста Башҡортостандан Земфира Рәшитова етәкселегендәге "Хазина" этно-проекты беренсе дәрәжә лауреат исемен алды. Коллектив конкурста ситтән тороп ҡатнашты.

"Хазина" ҡатын-ҡыҙҙар төркөмө 2020 йылдың башында ойошторолдо. Төркөмдөң составы бик үҙенсәлекле: ҡурай - Земфира Рәшитова, вокал, ҡумыҙ - Зәлиә Нурлы, ҡыл ҡумыҙ - Зәлиә Ғәниәтуллина, ҡыл ҡумыҙ прима - Наилә Биктимерова, думбыра - Гөлназ Нафиҡова. Башҡарыусылар үҙ репертуарына һирәк яңыраған милли көйҙәрҙе һәм йырҙарҙы һайлай. Ошо ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә төркөм тамашасылар араһында танылып, һөйөү яулап өлгөрҙө. Бөтә Рәсәй кимәлендәге бәйгелә беренсе дәрәжә диплом яулауҙары улар ижадының үҙенсәлекле һәм киләсәкле булыуы тураһында һөйләй.



АҠЫЛ-ҠАҘНА



Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

# ЭСКӘНДЕН ТЕЛЕ...

## аҡса янсығынан да тиҙ сиселә

Ярлы булыр егеткә ҡаҙалы мал тап булыр, янғыҙ булыр егеткә ҡыҫыр ҡатын тап булыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәлә).**

Һәр насарлыҡтан ике дарыу бар: беренсеһе - ваҡыт, икенсеһе - өндәшмәү.

**(Француз мәҡәлә).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер көндө сәсәнә сал төшкән аҡыл эйәһенә йәш һәм бик матур ҡыҙ илап мөрәжәғәт иткән:**

**- Минә нимә эшләргә? - тигән ул йәш аралаш. - Кешеләр менән һәр ваҡыт матур мөғәмәлә итергә, береһен дә рәнйетмәҫкә, ҡулымдан килгәнсә бөтәһенә лә ярҙам итергә тырышам. Әммә рәхмәт һүҙе ишетер, ихтирам тойғоһо урынына йыш ҡына рәнйеш һәм мыҫҡыллы көлөү менән яуап бирәләр. Хатта бер ниндәй ғәйебем булмаһа ла, асыҡтан-асыҡ дошманлыҡ ҡылалар. Шуныһы бигерәк тә ҡыйын. Кәңәш бирегеҙ, минә нимә эшләргә?**

**Аҡыл эйәһе сибәркәйгә йылмайып ҡараған да:**

**- Шыр яланғас сисен дә, шул рәүештә ҡала буйлап үт, - тигән.**

**- Аҡылдан шаштығыҙмы әллә? - тип асыуланған ҡыҙ. - Улай итһәм, мине һәр кем хур итер. Аллаһы Тәғәлә мине ни эшләтер?**

**Шул сағында аҡыл эйәһе ишекте асҡан һәм өҫтәлгә көҙгө ҡуйған.**

**- Бына, күрәһеңме, - тигән ул. - Сисенеп, үҙеңдең матур тәнеңде кешеләргә күрһәтергә ҡурҡаһың. Ә бына нишләп яланғас күңел менән йөрөйһөң? Ул һинең бынауы ишек кеүек шар асыҡ. Кем теләй, барыһы ла унда инә ала. Әгәр улар һинең саф күңеллелегеңдә, яҡшылығыңда көҙгөләге кеүек үҙҙәренең етешһеҙлектәрен, боҙоҡлоҡтарын күрһә, һине кәмһетергә, түбәнһетергә, яла ягырға тырышалар. Кемдәндер үҙенән яҡшыраҡ икәнен бөтәһенән дә таныйға көсө етмәй шул. Үҙҙәрергә теләмәйенсә, етешһеҙлеге булған кеше тәҡүәле кешегә хаслыҡ ҡыла башлай.**

**- Улай булғас, нимә эшләргә һуң миңә? - тип һораған ҡыҙ.**

**- Әйҙә, һиңә үҙемдең баҡсаны күрһәтәм, - тигән аҡыл эйәһе. Баҡсаһы буйлап йөрөтөп, ул:**

**- Күп йылдар ошо матур сәскәләргә һыу һибеп, тәрбиәләйем. Әммә мин бер ваҡытта ла уларҙың сәскә атҡан мәлен күргәнем юҡ. Атҡас ҡына уларҙың матурлығына һоҡланам һәм хуш еҫенән ләззәт алам. Һин дә ошо сәскә һымаҡ бул: йөрәгеңде кешеләргә һиҙҙермәй, ашыҡмай ғына ас. Кем һинең дуҫлыҡҡа лайыҡ булыуын, һиңә изгелек эшләгәнен, ә кем һине тапарға теләгәнен аҡрын ғына тикшер..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 21027

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
2 июль 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы –
**ПР905**

Тиражы - 3400
Заказ - 708